✓ *Борон бер ханлыҡта ғәйбәтселәр үрсеп киткән. Баш вәзир был хаҡта ханға еткергән һәм: "Ғәйбәтселәрҙең телдәрен ҡырҡырға кәрәк", - тигән тәҡдимен дә әйткән. "Ҡырҡығыҙ, - тигән зирәк хан, - тик ғәйбәтселәрҙең телдәрен түгел, уларҙы тыңлаусыларҙың ҡолағын..."*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 СЕНТЯБРЬ 5 ОКТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ - ҠАРАСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№39 (509)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Милләт эстафетаһы,** йәки Баймаҡ ауылдары тарих яҙа — 3





**Шәп тә йүгер,** эске тыныслығыңды ла һаҡла — 4





**Донъяла телевидение булмаһа...** бөгөн мәҙрәсәлә йөрөр инем — 8-9





**Яҙмышына яҙғаны...** телевидение — 11





14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәш көсөнә таяна, ҡарт - аҡылына, тиҙәр, ә шулай ҙа уларҙың кемеһенә бөгөн көн күреүе ауырыраҡ?

***Вилур ӘХМӘТОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты:*** Бөгөн шулай ҙа өлкәндәргә йәшәүе ауырыраҡтыр, тигән ҡараштамын. Бигерәк тә мораль яҡтан, сөнки ғүмер буйы эшләп өйрәнгән быуын өсөн пенсияға сығыу - үҙе бер стресс. Кеше үҙен ситкә тибәрелгән, йәмғиәткә кәрәкһеҙ итеп тоя башлай. Әлбиттә, пенсияһы айлыҡ сығымдарҙы ҡапларлыҡ күләмдә булһа, ул рәхәтләнеп ял итеп ятырға ла риза булыр ине лә бит... Ҡайһы бер сит ил пенсионерҙары кеүек, донъя буйлап сәйәхәт ҡыла, шифаханаларҙа ял итә, үҙҙәрен ҡараусы ярҙамсы яллай алмай шул беҙҙең ҡарттар. Тормош сифаты түбән булғанлыҡтан, шул пенсияларының да мәнфәғәтен күрә алмайынса донъя ҡуйыусылар байтаҡ. Беҙҙәге уртаса ғүмер оҙайлығы үҙегеҙгә мәғлүм: 192 ил араһында Рәсәй 129-сы урында килә (ирҙәр өсөн - 59-60, ҡатындар өсөн 73 йәш). Дөрөҫ, ауыл ерҙәрендәге үҙ өйөндә көйөн күреп, йорто янында ярҙамсы хужалыҡ тотҡан пенсионерҙарҙы, насар йәшәй, тип әйтеп булмай, уның ҡарауы, уларҙың күпселеге, үҫеп етеп, башлы-күҙле булып, ғаилә арттырып ятыусы балаларын һәм ейәндәрен дә аҫырарға мәжбүр бит. Үкенескә күрә, йәштәргә ауылда эш юҡ, тип күп һөйләп һәм яҙып, беҙ йәштәрҙе шундай ҡараш менән килешеп йәшәргә өйрәтеп тә бөтөрҙөк шикелле. Йәштәр көсөнә таяна, тип юҡҡа әйтмәгән бит халыҡ. Ата-әсәң таяныс булыуы бәхет, әлбиттә, ләкин ғүмер буйы уларға таянырға түгел, киреһенсә, уларға таяныс булыр өсөн әҙерләү кәрәктер йәштәргә үҙҙәрен. Ә бының өсөн инде ауылда бына тигән итеп донъя көтөргә, эшен дә, эшенә күрә ашын да табырға була, тырышлыҡ һәм ихтыяр көсөң генә булһын.



"Киске Өфө" - ҡартлыҡта шатлыҡ", ти Баймаҡтар.


**(Дауамы 2-се биттә).**


АФАРИН!

# РУСЛАНДЫҢ ХЫЯЛЫ -

## олимпиадала ҡатнашыу



**Баш ҡаланың Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Руслан Фәйзуллин Сингапурҙа үткәрелгән үҫмерҙәр араһында ҡаяға үрмәләү буйынса донъя чемпионатынан оло еңеү менән ҡайтты. Шуның менән ул Рәсәйҙә, Башҡортостанда ҡаяға үрмәләү спорты юғары кимәлдә үҫешкән булыуын иҫбатланы.**

Руслан ҡаяға үрмәләү спорты менән ҡыҙыҡ күреп кенә шөғөлләнә башлай. Тора-бара был спорт уны үҙенә нығыраҡ йәлеп итә. Йәш егет, физик күнекмәләр, ярыштар аша таһыллығын, кимәлен күтәреүгә, һуңынан иһә юғары күрһәткестәргә өлгәшә башлай. Шул саҡта инде ул ҡаяға үрмәләү буйынса ярыштарҙа күп тапҡыр донъя чемпионы, халыҡ-ара уйындар еңеүсеһе, атҡаҙанған спорт мастеры Евгений Вайцеховский өлгөһөн маяҡ итеп алып, был спортта юғары еңеүҙәр яуларға маҡсат ҡуя.

Беренсе ярышы 2009 йылда була. Өфө ҡалаһы беренселегендә дүртенсе урын яулай. Артабан Рәсәй беренселектәрендә ярышыу һөҙөмтәләре буйынса илдәге беренсе унау исемлегенә эләгә. Санкт-Петербург ҡалаһында үткән "Невские просторы" ярыштарында өсөнсө урынды яулай. Һуңынан Өфөлә, Пермдә үткән Рәсәй беренселектәрендә - икенсе урын, ололар араһындағы Рәсәй кубогында - туғыҙынсы, үҫмерҙәр араһында беренсе урынға күтәрелә. Шулай Европа, донъя кимәленә сыға. Һуңғы ярышта - Сингапурҙа үткән үҫмерҙәр араһындағы донъя чемпионатында чемпион була. Был еңеү Русланға спорт мастеры нормативын үтәргә мөмкинлек бирә. Киләһе йылға ололар араһындағы донъя чемпионатына һәм халыҡ-ара уйындарға саҡырыу ала.


**(Дауамы 16-сы биттә).**

*ИШАРА*

# ЯРТЫ-ЙОРТО ХӘҠИҠӘТ...

## һәр кем телендә

**Гәзиттең 37-се һанында Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына тәҡдим ителеүселәрҙең "Бөгөн ни өсөн ысынбарлыҡ хаҡында... яҙа, һөйләй, күрһәтә алмайбыҙ?" тигән һорауға ярым хәҡиҡәт менән яуап биреүен уҡып, фекерҙәрем менән бүлешергә булдым.**

Бөтмәҫ һуғыштар, ҡырылыштар милләттең генофондын ҡаҡшата. Аҙсылыҡта ҡала тороп, аҡылы булған ниндәй милләт бәхәскә инеп, тағы ла халҡын ҡаҡшатҡыһы килһен? Иҫемдә, ҡасандыр бер журналист абруйлы политологтан: "Толерантлыҡ нимә ул?" - тип һораны. "Берәү - талай, ә икенсеһе - түҙә", - булды яуап. Бына ни өсөн халыҡтың битараф, ғәмһеҙ булыуын, донъяға ҡул һелтәүен аңларға мөмкин. Кемгә халыҡтың фекере ҡыҙыҡ? Халыҡ менән иҫәпләшеп тә тормай, бөтөн мәсьәләләрҙе Үҙәк үҙе генә хәл итә. Бөтөн нәмәне "берҙәм"гә әйләндереп бөтөп баралар бит инде. "Берҙәм Рәсәй", "Берҙәм стандарттар" һәм башҡалар.

Шағир Рафаэль Сафиндың "Томан" тип аталған шиғыры бик йыш иҫемә төшә:

*"Томан... Томан... Ҡай арала*
*Төштө һуң был томаны?*
*Томанлы уйҙарға сумып,*
*Текә ярҙа торамын.*
*Аҫта йәшерен көрәш бара,*
*Аҫта - томан аҫтында.*
*Бысаҡ йөҙө йылтырап ҡуя*
*Йылмайыуҙар артында"*

Эйе, томанлы мәҡәләләр уҡып, ысынбарлыҡты, кешеләрҙең ысын йөҙөн күрә лә, нимә уйлағанын аңлай ҙа алмай ҡалабыҙ. Бик күптән, дәүләтебеҙҙең иң ҙур сәнәғәт тармағына Үҙәктең хужа булыуын ишетеп, минән 5 йыл алдараҡ уҡып сығып, оҙаҡ йылдар юғары урындарҙа эшләп пенсияға сыҡҡан танышыма шылтыратып: "Ниңә был эшкә юл ҡуйыла, ағайҙарыбыҙ ҡайҙа?" - тип ярһып һорағас, ул тыныс ҡына: "Ағайҙарҙың башын ашап бөттөләр инде", - тине. Телефон аша һөйләшә торған тема түгеллеген аңлап, трубканы һалып ҡуйҙым. Бөтә бәлә көслө, ғәйрәтле, аҡыллы ағайҙарыбыҙ юҡлыҡта икән, тигән һығымта яһаным үҙемсә.

Түҙәбеҙ. Урланған дандар (Рейхстагҡа беренсе булып Башҡорт иле егете байраҡ ҡаҙағанын да, башҡа ҡаҙаныштарҙы ла танымаҫҡа тырышалар, уларҙы икенсе милләттәргә "бирәләр" һ.б.), тураҡланып, ҡырҡылып бөткән хәҙерге Башҡортостан картаһына ҡарап та түҙәбеҙ. Толерант булырға өйрәттеләр бит. Һуңынан, башҡорттар толерант халыҡ, тип маҡтанабыҙ, ә йөрәктән ҡан тама...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# *Йәш көсөнә таяна, ҡарт - аҡылына, тиҙәр, ә шулай ҙа уларҙың кемеһенә бөгөн көн күреүе ауырыраҡ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Динара ҠОТЛОБАЕВА, йәш ғаилә хужабикәһе:*** Йәштәргә еңелерәктер, тип уйлайым. Дөрөҫ, ауылды йәшәтеп торған мәктәпкә генә ҡарап ҡалдыҡ хәҙер. Эш юҡ. Ололар үҙҙәрен ғүмер буйы бил бөгөп тәьмин иткән пенсия аҡсаһына йән аҫрай, өҫтәүенә, балаларын ҡарай. Ләкин ауыр тип зарланып ултыра торған заман түгел, хәләл көсөңә таянып, үҙ көнөңдө үҙең күрергә тырышырға кәрәктер, тигән фекерҙәмен. Йәшлек көсө шул уҡ ваҡытта ололар аҡылы, тәжрибәһе һәм кәңәшенә лә бик мохтаж була, униһын да иҫтән сығарырға ярамай.

Эйе, йүнсел йүнен таба, көнөн күрә. Ҡайһы бер ауылдарҙа йәштәр эш эҙләп ситкә, ҡалаларға сығып китәләр, тик унда ла бит бер кемде лә әҙер донъя көтөп тормай. Эш тапҡан хәлдә лә, бар аҡсалары фатир өсөн түләүгә китеп тора. Беҙҙең ауыл ҙур ғына. Шуныһы ҡыуаныслы: ул йылдан-йыл ҙурая бара. Йәштәр ер участкаһы алып, йорттар һала. Урман яғы булғанлыҡтан, ир-егет ағас эше менән мәшғүл, ҡатын-ҡыҙ йорт усағын һаҡлай, йәшелсә, емеш-еләктән ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ запасы туплай, ҡул эштәре менән була, ир кеше тапҡан болдо һаҡсыл итеп тотона, ғаиләне тәьмин итеүгә бүлә. Йәш ғаилә булараҡ, бүтәндәрҙән уҙып китмәһәк тә, юҡты бар итергә тырышып ятҡан көнөбөҙ. Умарталыҡ тотабыҙ, уның эше лә, мәшәҡәте лә күп, шуға ла иремә таяныс, ярҙамсы булырға тырышам. Тағы ла шуны әйтергә теләйем: йәштәр үҙ көсөнә таяна, тинек, ләкин йәштәргә, ғәҙәттә, тиҙ һәм күп кәрәк. Ә бит булғанына шөкөр итеп, сабырлыҡ менән донъя көтөүгә етмәй. Был юҡ, теге юҡ, тип күп зарланһаң, сабырһыҙлыҡ күрһәтһәң, булғанынан да яҙыуың ихтимал.

***Фәрит ӘХМӘРОВ, ветеран журналист, Сибай ҡалаһы:*** Өс бала атаһы булараҡ, был турала нык ҡына уйланғаным булды. Эйе, хәҙер бер кемгә лә йәшәүе еңел түгел. Кеше иле менән дә, үҙе менән дә киләсәктә ни булырын белмәй йәшәй. "Коммунизм" тигән һүҙҙән хәҙер мыҫҡыл итеп көлөргә әҙер торалар, әлбиттә, ләкин ул беҙҙең хеҙмәт ялҡынын, йәшлек дәртен, белем алыуға һәм яҡшы Кеше булырға ынтылыштарыбыҙҙы берләштереүсе маҡсат ине. Ә хәҙерге йәштәр иртәгә ни эшләрен дә күҙ алдына килтерә алмай. Шуға ла уларҙа энтузиазм да, маҡсат та, киләсәккә ынтылыш та юҡ. Балалар мәктәп тамамлай - эш юҡ. Аптырағас, вузға уҡырға ингән була, уны тамамлай - тағы эш юҡ. Бөтә урындарҙа ла "эш тәжрибәһе булған" белгес талап ителә. Эшкә алып, өйрәтмәгәс, ул "тәжрибәне" ҡайҙан алаһың? Хәҙер йәше утыҙға етеп тә, эштең нимә икәнен белмәгән йәштәр күбәйеп бара. Уларҙан киләсәктә нимә көтмәк кәрәк? Бөгөн йәштәрҙең көсөн дә, ҡарттарҙың аҡылын да ҡулланыр урын юҡ. Иң ҙур бәлә бына шул. Йәштәр эш таба алмай. Өйләнер, балалар үҫтерер ине - йәшәр урындары юҡ. Ололарҙың, исмаһам, үҙ йорттары, ҡасандыр дәүләт бушлай биргән (хәҙер быға ышаныуы ла ҡыйын!) фатирҙары бар, әҙ булһа ла пенсия аҡсаһы килеп тора. Балаларыма ярҙам итәм, тип тырышып йөрөгән була. Шуға ла бөгөн оло быуынға йәшәүе барыбер ҙә йәштәргә ҡарағанда еңелерәктер, тигән уйҙамын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**



• Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була**. Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", 10 уҡыусыға - "Айыҡ туй сценарийҙары", 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

**Иғтибар!** 2013 йылдың тәүге яртыһына июлдә, августа уҡ яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 8 уҡыусыбыҙға бүләккә матур китаптар вәғәҙә иткәйнек. Шулай итеп, **"400 башҡорт халыҡ йыры"** китабы Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылынан Камил Илембәтов, Баймаҡ ҡалаһынан Әлиә Шарапова, Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылынан Сабира Вәлиева, Баймаҡ районынан Г. Тимерәсов өлөшөнә, М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** китабы Хәйбулла районы Бәләкәй Арыҫланғол ауылынан Айгөл Сурина, Ишембай районы Һайран ауылынан Ғәлимйән Яҡупов, Өфө ҡалаһынан Л. Ғәниева, Межгорье ҡалаһынан Жөмәҙиә Хәйруллина өлөшөнә сыҡты.

• Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев энергетика һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ объекттарын 2012-2013 йылғы йылытыу миҙгеленә әҙерләү барышы тураһында видеоселектор кәңәшмәһе үткәрҙе. Унда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты. Дмитрий Медведев билдәләүенсә, илдә йылытыу миҙгеленә торлаҡ фонды - 90 процентҡа, ҡаҙанлыҡтар - 87 процентҡа, йылылыҡ селтәрҙәре һәм һыу үткәргестәр 91 процентҡа әҙер.

✓ БР Президенты ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы нигеҙендә Республика кадрҙарҙы һынау үҙәге булдырыласаҡ. Былдай ҡарар 26 сентябрҙә БР Президенты ҡарамағындағы кадрҙар комиссияһы ултырышында ҡабул ителде. Әлеге Үҙәктә дәүләт хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ дәүләт хеҙмәте вазифаларына дәғүә иткәндәр өсөн тест ярҙамында комплекслы һынауҙар үткәреләсәк. Һынауҙарҙы эксперттар төркөмдәре үткәрәсәк.

✓ 2012 йылда Башҡортостан 2011-2015 йылдарға Мәғарифты үҫтереү буйынса федераль маҡсатлы программа сараларын тормошҡа ашырыуға 70 миллион 360 мең 800 һум федераль субсидия аласаҡ. Субсидияларҙы бүлгәндә төбәк һәм муниципаль мәктәпкәсә белем биреү системаларын үҫтереү буйынса комплекслы программа сараларын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә Рәсәй Федерацияһы субъекттарында мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн булдырылған өҫтәмә урындар һаны тураһындағы статистик мәғлүмәттәр иҫәпкә алынған. Федераль бюджеттан йәмғеһе 72 субъект субсидия аласаҡ.

✓ 2013 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәт хаҡының минималь күләме Рәсәйҙә 5205 һумға тиклем артыуы ихтимал. БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, әлеге ваҡытта хеҙмәт хаҡының минималь күләме илдә 4611 һум тәшкил итә. Был күрһәткесте яҡынса 13 процентҡа арттырыу планлаштырыла.

✓ Хәйбулла районы Советы депутаттары 25 сентябрҙә контракт буйынса Раил Ибраһимовты район хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Раил Хазморат улы Ибраһимов 1957 йылдың 12 майында Хәйбулла районының Оло Әбеш ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт ауыл хужалығы институтын тамамлаған.

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП

**Баймаҡ районы ауылдарында бына ике тиҫтәләп йыл инде "Атайсал" һәм "Ағинәйҙәр" клубтары уңышлы эшләп килә. Район үҙәк китапханаһы ойошторған һәр бер сараның уртаһында ҡайнай был клубтар ағзалары. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә улар Баймаҡ үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре, район башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына һәм Рәсәй тарихы йылына арнап ойошторолған эстафета сараларында ҡатнаша. Уға йомғаҡ декабрь айында яһаласаҡ.**

# МИЛЛӘТ ЭСТАФЕТАҺЫ,

## йәки Баймаҡ ауылдары тарих яҙа



Темәстәр ниғмәттәргә эстафета тапшыра.

### Ҡағыҙға төшкән - тарих...

Ни сыҡһа, шул баймаҡтарҙан сығыр, тиер берәү. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, атай-олатайҙарыбыҙҙың 1812 йылда күрһәткән ҡаһарманлығына бәйле тарихыбыҙҙы өйрәнеү, тергеҙеү, халыҡ хәтеренә ҡайтарыу өсөн ошонан да ҡулайыраҡ тағы ла ниндәй сараны уйлап табырға була? Был сараға һәр ауылдың, мәктәптең крайҙы өйрәнеүселәре, тарих уҡытыусылары ғына түгел, барлыҡ ауыл йәмәғәтселеге, йәше лә, ҡарты ла йәлеп ителгән. Уларҙың һәр ҡайһыһының алдына шундай маҡсаттар ҡуйылған:

- Теге йәки был ғаиләнең, ара, зат вәкилдәренең 1812 йылғы Ватан һуғышына ниндәй мөнәсәбәте бар? Ватан һуғышында кемдәрҙең ҡартаталары йә олаталары, яҡын туғандары ҡатнашҡан, ниндәй батырлыҡтар күрһәткән?

- 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡаһармандарының вариҫтары бөгөн нисек йәшәй, атай-олатайҙарының рухына, васыятына улар тоғромо, илебеҙгә, республикабыҙға, халҡыбыҙға нисек хеҙмәт итә, туған телен беләме, йола-традицияларыбыҙҙы дауам итәме, милләтебеҙҙе һан һәм сифат яғынан арттырыу һәм үҫтереү йәһәтенән нимәләр эшләй? Ҡыҫҡаһы, улар атай-олатайҙары васыят итеп тапшырған милләт эстафетаһын киләсәк быуындарға лайыҡлы тапшырамы?

Ауылдан-ауылға тапшырып йөрөтөр эстафета предметын матур итеп биҙәлгән альбом һынландыра. Унда һәр ауылдың аҡһаҡалдары, ағинәйҙәре, мәктәп уҡытыусылары һәм уҡыусылар үҙ ауылының, затнәҫеленең 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле тарихын, вариҫтарҙың ниндәй эштәр башҡарыуын бәйән итә, уларҙың фотоларын, тарихи документтарҙың күсермәләрен урынлаштыра.

Биҙәлеше, зауыҡ йәһәтенән альбом күҙҙең яуын алырлыҡ. Альбомды тарихи әсбап, китап менән дә сағыштырырға мөмкин булыр ине. "Ҡағыҙға төшкән һәр һүҙ, һүрәт шундуҡ тарихҡа әүерелә", тиҙәр. Ошо күҙлектән ҡарағанда, баймаҡтар үҙҙәренең 1812 йылғы Ватан һуғышына бәйле данлыҡлы тарихын йылъяҙма итеп яҙып, сираттағы ауылға ғына түгел, киләсәк быуынға ла тапшыра. Беҙҙең быға тиклем ниндәйҙер махсус томлыҡ өҫтөндә эшләүсе ғалимдар төркөмө, институт, академия хаҡында ишеткәнебеҙ бар ине, әммә тотош ауыл, район менән тарих яҙыу өлгөһөнә тәүге тапҡыр осрайбыҙ. Был сараны шулай уҡ шәжәрә байрамдарының логик дауамы, аныҡ бер маҡсатҡа йүнәлдерелгән формаһы тип тә атарға булыр ине. Үкенескә күрә, бынан бер-ике йыл элек кенә гөрләп барған шәжәрә байрамдары һирәк үткәрелә башланы шул. Күрәһең, киләсәктә шәжәрә байрамдары ошо рәүешле, төрлөсә маҡсатлы йүнәлештә дауам ителергә тейештер ҙә.

### Йәнле аралашыу формаһы ла

5 мартта Баймаҡ ҡалаһында башланған эстафета Йомаш-Таулыҡай-Ишбирҙе-Түбә-Ярат-Мерәҫ-Ҡарамалы-Ишмырҙа-I Этҡол-Иҫке Сибай-Әбделкәрим-Байыш-Әхмәр-Сосновка-Темәс-Ниғәмәт (Яйыҡбай) -Төркмән-Ҡуянтау-Билал (Күгиҙел, Өмөтбай)-Ҡолсора-Күсей-Сәйғәфәр-Һаҡмар-Сыңғыҙ (Буранбай)-Ҡаратал-Юлыҡ-II Этҡол (Байым)-Кәрешкә (Татлыбай)-Урғаҙа ауылдары буйлап үтеп, декабрь аҙағында Баймаҡта 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына арналған фәнни-ғәмәли конференция менән тамамланасаҡ. Бәйгелә еңеүселәр ҙә йомғаҡлау сараһында бүләкләнәсәк.

Әйтергә кәрәк, был үҙенсәлекле башланғыс республика йәмәғәтселегенең иғтибарын үҙенә йүнәлтеүҙе талап итә. Әгәр ҙә барлыҡ республика матбуғат саралары, радио һәм телевидение етәкселәре һәм журналистары был сараның мөһимлеген аңлаһа һәм яҡтыртһа, уны популярлаштырыу, таратыу күпкә еңелләшер ине. Әгәр ҙә сараны республика масштабына күсереп, уның яңыса маҡсатын, маршрутын билдәләгәндә һәм үткәргәндә күпселек сараларға кампания итеп ҡарауҙан да арыныр инек. Әйткәндәй, Баймаҡтағы был сараны ойоштороусыларҙың был эстафетанан башҡа ла республикаға, тотош илгә өлгө булырлыҡ тағы ла әллә нисәмә төрлө саралар ойошторғаны бар. Тик, ниңәлер, улар һәр ваҡыт дөйөм иғтибарҙан ситтә ҡала килә.

Эстафета үҙ алдына ҡуйған һәр төрлө маҡсатынан тыш, ауылдар халҡының үҙ-ара аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу формаһына ла әйләнә бара. Юҡһа, һуңғы ике тиҫтә йылда илебеҙҙә шәхесте һәм милләтте тарҡатыуға йөҙ тотҡан үҙгәрештәр айырым кешеләрҙе генә түгел, хатта ауылдарҙы ла бер-береһенән алыҫлаштырып өлгөргәйне. Элек ауылдарҙы бер-береһенә бәйләүсе иҡтисад нигеҙҙәре булған колхоз-совхоздарҙың юҡҡа сығыуы ауылдарҙы һәр йәһәттән бер-береһенән айырҙы. Ә был сара ошо хаталарҙы төҙәтә, йәғни эстафета тапшырыр өсөн билдәләнгән ауылға барыусылар ундағы халыҡтың көнитмеше менән таныша, фекер алыша, яңыса хужалыҡ итеү ысулын өйрәнә, тәжрибә уртаҡлаша, бәйләнештәр булдыра.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Бәхетленең ҡунағы бер көндә, тигәндәй, райондың Темәс ауылы делегацияһы эстафетаны тапшырырға Ниғәмәт, Яйыҡбай ауылдарына килгән саҡта ошо көндәрҙә 60 йәшен билдәләгән танылған шағир Рәмил Йәнбәк менән дә осрашыу булды. Артабан шағир менән осрашыуҙар Ҡаратал, I Этҡол ауылдарында, Баймаҡ лицей-интернат мәктәбендә дауам итте. Баймаҡ үҙәкләштерелгән китапханалар селтәрендә Рәмил Йәнбәктең шиғырҙарын һөйләүселәрҙең конкурсы ла булды, унда барлығы 44 ауылдан 57 бәйгесе ҡатнашты. Быныһы ла башҡалар өлгө алырлыҡ тәжрибә булды, тиергә мөмкин. Сөнки хәҙер шиғриәт кисәләре үткәреү йолаһы ла онотола бара бит.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# УЙҘЫҢ ТЕЛЕ БАРМЫ?

Был донъяның ҡыҙыҡ мәлдәре күп инде ул. Иҫемдә, беренсе синыфта уҡығанда рус телен өйрәнә башланыҡ. Шул саҡта башыма бер уй килде: рустар ниндәй телдә уйлай икән? Бына мин, башҡорт балаһы булараҡ, башҡорт телендә уйланам. Уйҙың теле бармы икән? Шунан рус телендә уйлап ҡарарға булдым. Юҡ, килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Барыбер тәүҙә башҡортса уйланыла, һуңынан тәржемә ителә.

Ә әле, олоғайған көндәремдә, яҡын-тирәмдә (Өфөнөң Черниковка өлөшөндә йәшәйем) башҡорттар бик һирәк осрай, шуға гел русса һөйләшергә тура килә. Шул сәбәпле, саҡ ҡына русса уйларға ла өйрәндем шикелле. Тик мин ныҡыш кешемен. 70 йәшлек инәй булһам да, китапхананан башҡорт гәзит-журналдарын алып уҡып барам. Магазинға инһәм, юрый һатыусыға башҡортса өндәшәм. Араларында мине аңлаусылар ҙа осрай. Аңламағандарына тәүҙә башҡортса өндәшәм дә үҙемде үк руссаға тәржемә итәм. Әлбиттә, башҡорт булыуым менән ғорурланам һәм һәр ерҙә гүзәл башҡорт һөйләше ағылып тороуын теләйем. Шундай йомшаҡ, наҙлы бит ул башҡорт һүҙҙәре.

Хәйер, кеше рус телендә уйлаймы, әллә бүтән телдәме - уныһы мөһим түгел. Иң мөһиме - уйҙарының ниндәй булыуы. Яҡшылыҡмы уның уйында, әллә яуызлыҡмы? Тағы ла берҙе уйлап, икенсене һөйләп, өсөнсө төрлө ҡылыҡтар ҡылмаһын ине кеше. Шундайҙар күбәйеп бара бит...

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дәүләт Думаһы Рәсәйҙә Берҙәм тауыш биреү көнөн индереү тураһында закон ҡабул итте. Уға ярашлы, Берҙәм тауыш биреү көнө Рәсәйҙә йылына бер тапҡыр, сентябрҙең икенсе йәкшәмбеһендә үткәреләсәк. Тимәк, алдағы һайлауҙар Рәсәйҙә 2012 йылдың октябрендә үтә, ә унан һуңғылары сентябрь айында үткәреләсәк. Закон проектын ҡабул итеү республика ҡануниәтенә үҙгәрештәр индереүгә сәбәп буласаҡ.

✓Ағымдағы йылдың сентябрь айына Рәсәйҙең ашлыҡ запасы 34,6 миллион тонна тәшкил иткән, был уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 21,2 процентҡа аҙыраҡ, тип белдерә Росстат. Ашлыҡ запасының кәмеүе быйыл уңыштың аҙыраҡ булыуы менән бәйле. Бер йыл элек иген етештереү 94,2 миллион тонна булһа, быйылғы йылда, рәсми прогноздар буйынса, 70-75 миллион тонна булған. Әле үткән йылдан ҡалған ашлыҡ запасы яҡынса 19 миллион тонна тәшкил итә.

✓Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы 2013 йылға сит ил граждандарын эшкә саҡырыу һаны квотаһын раҫланы. Киләһе йылда Рәсәйгә 410 мең хеҙмәт мигранты эшкә килергә мөмкин. Был һан ағымдағы йыл менән сағыштырғанда 50 меңгә кәмерәк. Министрлыҡта белдереүҙәренсә, квоталар һаны эш биреүселәрҙең эшсе ҡулдарға булған ихтыяжынан сығып билдәләнгән. Дөйөм алғанда, Рәсәй компаниялары киләһе йылда 1225907 сит ил гражданын эшкә йәлеп итеүҙе күҙаллай.

✓29 сентябрҙә Башҡортостан баш ҡалаһында дөйөм ҡала өмәһе үтә. Йола буйынса ул Республика көнөн билдәләүгә ҡарата ойошторола. Өмә үткәрелгән көндә ҡаланың ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигоны барлыҡ предприятие һәм ойошмаларҙан сүп-сарҙы бушлай ҡабул итәсәк. Ә муниципаль торлаҡ ойошмалары ҡалдыҡтарҙы экологик айлыҡ дауамында тапшыра ала. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2011 йылдың көҙөндә экологик айлыҡ барышында Өфөлә 30 мең кубометрҙан ашыу сүп-сар сығарып түгелде. Сараларҙа 414 мең өфөлө ҡатнашты.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөнөң "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында корпустарҙы һәм административ биналарҙы реконструкциялау барышы менән танышты. Быйыл бында 56 урынға иҫәпләнгән йоҡо корпусы асылды, әле өсөнсө корпуста ремонт эштәре тамамлана.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ӨФӨ ТӘЖРИБӘҺЕ ҠЫҘЫҠ

**Өфөнөң ауыр хәлгә тарыған әсәләргә ярҙам күрһәтеү тәжрибәһе Рәсәйҙең башҡа төбәктәре өсөн дә ҡыҙыҡ булмаҡсы.**

Рәсәй Дәүләт Думаһының һаулыҡ һаҡлау комитеты ултырышында "Катын-ҡыҙҙар һәм балалар һаулығына көс ҡулланыуҙың тәьсире" тип исемләнгән түңәрәк ҡор уҙҙы. Унда Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева ла ҡатнашты һәм Өфөләге "Изгелек" комплекс үҙәгенең ҡатын-ҡыҙҙарға психологик ярҙам күрһәтеү буйынса эше менән таныштырҙы. Федераль эксперттар илдең башҡа төбәктәренә Өфө тәжрибәһен үҙләштереүҙе тәҡдим итеп, резолюция һәм тәҡдимдәр ҡабул итте.

"Изгелек" үҙәге 2008 йылдан алып эшләй һәм ошо ваҡыт эсендә бында 115 ҡатын-ҡыҙ һәм 118 бала үҙҙәренә яҡлау тапҡан. Әсәләр үҙҙәккә күпселек осраҡта торлаҡ юҡлығы (42,3 процент) һәм йәшәү өсөн шарттар (35,2 процент) булмауы һөҙөмтәһендә мөрәжәғәт итә.

## ХУЛИГАНДАР БОРСОЙ...

**Республика парламенты спорт сараларында иминлекте тәьмин итеүгә ныҡлап тотоноrға уйлай. Депутаттар ошо тәңгәлдәге Рәсәй һәм донъя тәжрибәһен өйрәнә башлаған да инде.**

Башҡортостан өсөн ғәҙәти булған хоккей көйәрмәндәре һәр саҡ үҙҙәренең тыныслығы менән айырылып торҙо. Шуға ла был йөнәттән проблемалар килеп сыҡҡаны булманы. Ләкин баш ҡалаға ҙур футбол килеү менән фанаттар проблемаһы күтәрелеп сыҡты. Футбол фанаттары артыҡ бәйһеҙлек менән айырылып тора. Бер насар ваҡиға булды ла инде.

Бөгөнгө көндә спорт фанаттары тәртип боҙған осраҡта, уларҙы "Спорт һәм мәҙәни сараларҙы ойошторғанда йәмәғәт тәртибен боҙоу" статьяһына ярашлы яуапҡа тарттырырға була. Сара барған майҙанға сыҡҡан йәки унда сит әйберҙәр ташлаған өсөн 3-5 мең штраф ҡаралған. Шулай уҡ "Хулиганлыҡ" статьяһын да бер кем кисектермәгән. Был статьяны эләктергән кешегә 15 тәүлек "ултырып" сығырға тура киләсәк. Ә шулай ҙа тәртип һаҡлау органдары, фанаттарҙы тыйыу өсөн махсус закон кәрәк, тигән фекерҙә.

## АВТОМОБИЛЬ ХУЖАЛАРЫНА

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышы булып үтте. Көн үҙәгенә тиҫтәнән ашыу мәсьәлә ҡуйылды.**

Депутаттар "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында"ғы республика кодексына үҙгәрештәр индереүҙе һорап, БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтайға мөрәжәғәт итеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Улар, транспортты газон өҫтөндә парковкалаған өсөн административ яуаплылыҡ индерелергә тейеш, тигән фекерҙә. Был мәсьәлә ҡала етәкселегенең парковкалауҙы ойоштороу проблемаһына арналған ултырышында ла күтәрелеп сыҡҡайны. Өфөлә парковка урындары етмәүе билдәле, әммә был автомобилде теләгән ергә ҡуйыуға һылтау булырға тейеш түгел, ти етәкселәр.

Депутаттар шулай уҡ ҡала округы Советы эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһының яңы положениеһын ҡабул итте. Йәмәғәт палатаһын туплау буйынса конкурс ойоштороу тәртибе лә раҫланды. Һайланасаҡ йәштәр октябрь айы дауамында өс этапты үтергә тейеш буласаҡ. Конкурста ҡатнашыу өсөн ҡала Советы сайтына ғариза яҙырға мөмкин.

О, СПОРТ!

# ШӘП ТӘ ЙҮГЕР,

## эске тыныслығыңды ла һаҡла

**Йәйге биатлон буйынса донъя чемпионаты тамамланды. Рәсәй йыйылма командаһы туғыҙ алтын, биш көмөш һәм ете бронза миҙал яулап, көйәрмәндәрен ҡыуандырҙы. Йомғаҡтарға килгәндә, яҡташыбыҙ Максим Чудов 22 сентябрҙә уҙғарылған спринтта - алтын һәм 23-өндә, йәғни чемпионаттың аҙаҡҡы көнөндәге ҡыуышыу ярышында көмөш миҙал яулап, донъяның иң көслө спортсыларының береһе булыуын тағы бер тапҡыр раҫланы.**



Был чемпионатта шулай уҡ Рәсәй спортсылары Ольга Зайцева менән Алексей Волков икешәр алтын миҙал яуланы. Йәнтәслимгә уҙышыуҙарға, трибуналарҙа ҡыҙыҡлы осрашыуҙарға, танышыуҙарға, фотосессияларға, көйәрмәндәрҙең ҡыҫҡырыу-һөрәнләүҙәренә, спортсыларҙың ҡыуаныс һәм көйөнөстәренә бай булған чемпионат тәҫораттары һәр кемдә үҙенсә эҙ ҡалдырғандыр.

- Мин Мәскәү ҡалаһында тыуғанмын, Рәсәйҙең үсмерҙәр йыйылма командаһы ағзаһымын, - тигәйне юниорҙар араһында спринт буйынса алтын миҙал яулаусы Ольга Падчуварова үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашып, - Өфөлә тәүге мәртәбә генә түгелмен, бында Рәсәй кимәлендәге ярыштар үткәндә булғайным. Миңә Өфөләге "Биатлон" комплексы бик оҡшай, Рәсәйҙә генә түгел, донъяла иң яҡшы комплекстарҙың береһе ул, минеңсә. Бында ауыр, үҙенсәлекле рельефлы трасса һалынған. Әйткәндәй, Өфө ҡалаһы буйлап экскурсия үткәрелде, Башҡортостан Республикаһының милли музейында, батырығыҙ - Салауат Юлаевҡа арналған һәйкәл янында булдыҡ. Тәьҫораттарым бик яҡшы.

Ғөмүмән, чемпионатҡа килеүселәрҙең кеме менән генә һөйләшмә, барыһы ла бындағы ярыштарҙың ойошторолоуынан да, шарттарҙан да ҡәнәғәт ҡалыуы тураһында белдерҙе. РФ юниорҙар йыйылма командаһы ағзаһы Анна Костромкина, мәҫәлән, чемпионатҡа донъяның төрлө тарафтарынан иң көслө биатлон оҫталары килеүе, уларҙың тәжрибәһен өйрәнеү һәм аралашыу мөмкинлеге алыуы тураһындағы ҡыуанысы менән уртаҡлашты.

**Ә беҙ иһә ярыштарҙы күҙәткәндән һуң шундай һығымта яһаныҡ: башҡорт яугирҙары атта сабып барған хәл иткес мәлдә ярһыулыҡтарын һалҡын ҡанлылыҡ менән алыштырған һәм уҡтан тоҙ ата алған. Биатлонда ла уҙышыусы шәп шыуыу менән бер рәттән, тигеҙ тын алырға, йөрәген тыңлап, хәл-торошон тулыһынса контролдә тоторға тейеш. Ярышҡан саҡта биатлон оҫтаһы бер мәлдә йәшендәй етеҙ елә, ә тәғәйен генә бер ваҡыт арауығында винтовка күҙәүе аша сәпкә төҙәгән саҡта ҡаялай ҡымшанмай тора ала, был ваҡытта ул йөрәген тыңлай. Чемпионат ваҡытында ҡайһы берәүҙәргә ошо эске тыныслыҡ етенкерәмәне һәм улар, шәп йүгерһәләр ҙә, сәпкә тейҙерә ата алманы. Ә кемдәр медитацияға оҫталығын эшкә егә алды - улар финиш һыҙығын беренсе булып үтте.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# ҺЫРАНЫ...

## бүләккә

**Белеүегеҙсә, ағымдағы йылдың 1 июленән Өфөлә транспорт туҡталыштары эргәһендәге киоскыларҙа һыра һатыу тыйылды. Был сикләү былтыр ҡабул ителгән законға ярашлы индерелде. Закон буйынса, һыра башҡа алкоголле эсемлектәргә тиңләштерелде.**



Иҫегеҙгә төшөрөп китәйек: хәҙер урамда, йорттар эргәһендә, ҡала парктарында, баҙарҙарҙа һәм башҡа йәмәғәт урындарында һыра эсеү тыйыла. Эсемлекте тукланыу урындарында йәки өйҙә генә ҡулланырға мөмкин. Шулай уҡ, законға ярашлы, спирты 5 проценттан артыҡ булған һыра стационар магазиндарҙа ғына һатылырға тейеш. Ларек-киоскыларҙан ундай эсемлек һатыуҙан алына. Балалар баҡсаһы, мәктәп, спорт учреждениелары янында шулай уҡ һыра һатыу тыйыла. 2013 йылдың 1 ғинуарынан иһә, быға өҫтәп, яңы талаптар индереләсәк. Дөйөм майҙаны 50 квадрат метр тәшкил иткән магазиндарҙа ғына һыра һатыу рөхсәт ителәсәк. Эсемлек пластик һауыттарҙа һатылмаясаҡ. Был эсемлекте радио-телевидениела, йәмәғәт транспортында рекламалау тыйыласаҡ.

Яңы законды һыра менән кәсеп итеүселәр борсолоп ҡабул итте итеүгә, әммә... Теләк кенә булһын, әмәле та-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ленин исемендәге майҙанда баш ҡала округы хакимиәте һәм VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары дирекцияһы тарафынан "Олимпиадаға тиклем 500 көн" бөтә Рәсәй акцияһына арналған ҙур спорт байрамы ойошторолдо, унның сиктәрендә волонтерҙар ҡатнашлығындағы күнелле эстафета үтте. Унда Башҡорт дәүләт медицина университеты һәм "Индиго" үҙәге волонтерҙары ҡатнашты. Байрам сиктәрендә 2013 йылдың 26 февраленән алып 3 мартына тиклем үтәсәк VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарының презентацияһы ла булды. Унда әлеге сараның рәсми флагы тәҡдим ителде, буклеттар таратылды.

✓Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында "Туризм. Спорт. Ял. Шифаханалар" төбәк-ара форум-күргәҙмәһе асылды. БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Руслан Кинйәкәев билдәләүенсә, был форум III "Волга буйын асып" төбәк-ара фестиваленең генераль репетицияһы итеп ҡабул итә. Сара 2013 йылда Өфөлә үтәсәк. Был хоҡуҡҡа Башҡортостан Йошкар-Ола ҡалаһында үткән туристик фестивалдә яулаған еңеүҙәре арҡаһында лайыҡ булды.

✓Әлеге ваҡытта Өфөнөң хеҙмәт биржаһында рәсми рәүештә теркәлгән 7300-ҙән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә. Уларҙың 6500-ҙән ашыуы эшһеҙлек буйынса пособие ала. Халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, бындай пособиеның уртаса айлыҡ күләме 2012 йылдың тәүге туғыҙ айы эсендә Өфөлә 3979 һум тәшкил иткән. Август йомғаҡтары буйынса был күрһәткес Башҡортостан баш ҡалаһында 4022 һумға еткән.

✓Өфөлә "Тарихи тәжрибә, Рәсәй төбәк энциклопедистикаһы үсешенең көнүҙәк мәсьәләләре" бөтә Рәсәй фәннигәмәли конференцияһы булып үтте. Ике көн дауамында ғилми форумда Рәсәй энциклопедистикаһы тарихы, үсеше, төбәк энциклопедияларын әҙерләү мәсьәләләре тикшерелдее. Ғилми форум сиктәрендә "Башҡорт энциклопедияһы"ның аҙаҡҡы, етенсе томының презентацияһы булды. Энциклопедия нәшриәтенең генераль директоры Уйылдан Сәйетов билдәләүенсә, "Башҡорт энциклопедияһы" яҡын арала интернетта "Ғилми-нәшриәт комплексы" сайтында ла урын аласаҡ.

✓Ленин урамында урынлашҡан 87-се, 95-се йорттар араһындағы скверға Нестеров исеме бирелде. Сквер билдәле рәссам М. Нестеровтың 150 йыллыҡ юбилейы уңайынан асыласаҡ.

*БОРСОЛОУ БАР*

# ПЕНСИЯ ХӘЛДӘРЕ...

## үҙгәрерме икән?

**Чиновниктар пенсияны элеккесә, совет осорондағы кеүек, стажға һәм эш хаҡына ҡарап тәғәйенләргә тәҡдим итә. Пенсия фонды, ғәҙәттәгесә, "бәхет хаттары" - тупланма иҫәптәренең торошо тураһында белешмәләр тарата башланы. Әле эшләп йөрөгән һәм буласаҡ пенсияһы иҫәбенә аҡса күсереп барыусы 72 миллион рәсәйлегә ошондай хаттар ебәреләсәк. Ләкин хат һәм конверт өсөн - тонналап ҡағыҙ, почта сығымдарына миллионлап аҡса сарыф итеү бушҡа булмаҡсы: ошо арала хөкүмәт пенсия реформаһы барышына тамырынан үҙгәрештәр индерергә йыйына.**



● Бөтәһе лә 2002 йылда башланды. Бюджет ауырлыҡ менән тулылана, пенсия күләме бик бәләкәй ине, шунлыҡтан, был өлкәлә хәлде үҙгәртеү кәрәклеге килеп тыуҙы. Эшләп йөрөүсе граждандар өсөн тупланма иҫәбе булдырыу берҙән-бер дөрөҫ юл тип табылды. Предприятиелар түләгән социаль взностар ике өлөшкә бүленде: күберәк өлөшө пенсионерҙарға түләнһә, ҡалғаны эшләп йөрөүселәр иҫәбенә туплана барҙы. Ләкин 2008 йылда сеймалға хаҡтар 120 доллар сиген үтеп киткәс, властар пенсионерҙарҙың фәҡирлегенә сик ҡуймаҡсы булып, түләүҙәрҙе индексацияланы һәм совет осоронда эшләп алынған пенсия хоҡуҡтарын ҡайтанан барланы. Һөҙөмтәлә хәҙер пенсия йәшәү минимумынан күпкә артыҡ булһа ла, оҙайлы кризис нефткә хаҡтарҙы тағы ла төшөргәс, йүнле пенсия өсөн барыбер аҡса етмәйәсәге асыҡланды. Рәсәй Финанс министрлығы мәғлүмәттәренән күренеүенсә, 2011 йылда Пенсия фонды наҡыҫлығы 924 миллиард һум тәшкил итһә, 2050 йылға уның икеләтә артыуы ихтимал. Улай ғына ла түгел, йылдың-йылы пенсионерҙар һанының арта барыуын иҫәпкә алғанда, пенсияның уртаса күләме кәмейәсәк һәм ул эш хаҡының ни бары 20 процентын тәшкил итәсәк.

● РФ Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығында нимәне һәм нисек үҙгәртеү тураһында тәҡдимдәр өлгөрөп еткән дә инде. Шуларҙың иң ҡаршылыҡлыһы - дәүләт пенсия системаһы сиктәрендә тупланма пенсияны булдырыуҙан баш тартыу. Әлеге ваҡытта 1967 йыл тыуған һәм унан йәшерәк граждандарҙың индивидуаль тупланма иҫәбе бар. Унда эш биреүселәр күсергән взностарҙың 6 проценты "тамып" тора. Хеҙмәт министрлығы тупланма компонентты 2 процентҡа тиклем кәметеү яғында, уны, ғөмүмән, бөтөрөү тирәһендә лә һүҙ бара. Ә инде әле эшләп йөрөгән һәм киләсәктә пенсияһына өҫтәмә алырға теләгәндәргә аҡсаны дәүләттеке булмаған пенсия һәм инвестиция фондтарына йәки банк депозиттарына үҙ аллы туплап барырға тәҡдим ителә. Дәүләт пенсиялары иһә совет йылдарындағыса - стаж һәм эш хаҡынан сығып иҫәпләнә.

Ә бит, хәтерләһәгеҙ, әлеге системаны эшләүгә йылдар китте: һәр бер хеҙмәткәр Пенсия фондының мәғлүмәт базаһына инде-релде, һәр бирәүгә страховка таныҡлығы (йәшел төҫтәге карточка) бирелде, ә эш биреүселәр тарафынан күсерелгән аҡса граждандарҙың индивидуаль иҫәбенә таратып һалына барҙы. Индивидуаль иҫәптә аҡса күберәк булған һайын, пенсия күләме лә юғарыраҡ буласаҡ, тип көтөлдө. Хәҙер ошо системаны боҙоп, уның урынына пенсия иҫәпләүҙең ҡатмарлы формулаһына күсергә тәҡдим итәләр. Тимәк, пенсия күләме кешенең күпме эшләүенә һәм Пенсия фондына күпме аҡса күсереүенә түгел, ә ул пенсияға сыҡҡан мәлгә дәүләттең түләү мөмкинлектәренә бәйле буласаҡ.

**Шулай итеп, 1 июлдә ҡабул ителгән "Пенсияның тупланма өлөшө иҫәбенән түләүҙәрҙе финанслау тураһында"ғы федераль законға ярашлы, пенсияһының тупланма өлөшө формалашҡан граждандар Пенсия фондына ошо өлөштө билдәләү һәм уны түләүҙе һорап ғариза яҙа ала, тип хәбәр иткәйнек инде. Был түләү тәртибе башлыса хеҙмәт пенсияһы алыусы 1953 йылдан йәшерәк ир-егеттәргә һәм 1957 йылдан йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағыла. Эш биреүселәр уларҙың хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшө өсөн 2002 - 2004 йылдарҙа 2 процент тарифы буйынса страховкалау иғәнәһе индергән. Әгәр юғарыла күрһәтелгән йылғы кешеләрҙең пенсияһының тупланма өлөшө дөйөм хеҙмәт пенсияһына ҡарата 5 һәм унан да кәм процент тәшкил итһә, законға ярашлы, был граждандарға бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралған.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

была. Закондар сығып тора, уларҙы урап үтеү юлдары ла оҙаҡ көттөрмәй. Баш ҡалабыҙҙың Черниковка биҫтәһендәге бер киоскыла ла һыра һатыу тәртибе тураһындағы законды тормошҡа ашырыуҙың ғәҙәти булмаған ысулын уйлап тапҡандар. Артҡы ишектән йә прилавка аҫтынан тауар һатыу күптән инде модала түгел бит. Бына, ҡарағыҙ фотоға: һыра шешәһе өҫтөнә "Пакет һатыла. Бүләккә - һыра!", тип яҙып ҡуйғандар. Бәхәс юҡ, һатыусыларҙың, кибет хужаларының "ижади эшенә" һоҡланырға ғына ҡала. Бер яҡтан ҡараһаң, улар хаҡлы ла, сөнки закон буйынса һыра һатыу тыйыла, ә законда уны бүләк итеү тураһында бер һүҙ ҙә юҡ. Тимәк, законды боҙоу ҙа юҡ. Бүре лә туҡ, һарыҡтар ҙа имен.

Әлбиттә, яңы закон - уйлап һәм ваҡытлы яһалған аҙым. Ләкин уны һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу механизмдары камил түгел әле. Яуаплы тармаҡта эшләүселәрҙең, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренең, журналистарҙың рейдтары ғына етмәй бында. Башҡа механизмдар ҙа кәрәк. Юҡһа, әлеге киоскылағы һымаҡ ҡына түгел, беҙҙе тағы ла тапҡырыраҡ, хәйләкәрерәк һыра һатыу ысулдары көтә.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҺАБАНТУЙ КҮРҺӘТӘСӘКТӘР

**"Известия" гәзитендә хәбәр ителеүенсә, Рәсәй властары киң мәғлүмәт саралары өсөн милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатына йүнәлдерелгән план төҙөгән. Әлеге ваҡытта рәсми белдереүҙәр булмаһа ла, план РФ Хөкүмәтенең вице-премьеры Дмитрий Козак етәкләгән Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса ведомство-ара төркөм тарафынан раҫланған да инде.**

Планға ярашлы, 2012-2013 йылдарҙа, Рәсәй телевидениеһы эфирында илдә йәшәгән милләттәр, уларҙың мәҙәниәте тураһындағы тапшырыуҙар һаны артасаҡ. Федераль каналдарҙа ошо темаға арналған документаль фильмдар, "Россия" һәм НТВ каналдарында төрлө милләт вәкилдәренең ыңғай образын тыуҙырған нәфис фильмдар һәм сериалдар күрһәтеләсәк. "ТВ Центр" һәм "Мир" каналдары һабантуйҙарҙан, Ҡорбан, Ураҙа байрамдарынан тура эфирҙар ойоштораСаҡ. Молдова диаспораһы өсөн Мэрцишора - яҙ килеү байрамы, үзбәк , тажик һәм башҡа төрки халыҡтары өсөн Наурыз байрамы күрһәтеләсәк.

Шулай уҡ властар интеллектуаль шоуҙарҙың да эстәлеген ватаныбыҙҙың милли һәм мәҙәни төрлөлөгөн сағылдырыуға йүнәлтергә уйлай. Яңы талап тура эфирҙар һәм интеллектуаль шоуҙар менән генә сикләнмәйәсәк. Йыл аҙағына этнос-ара журналистика гильдияһы милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡтыртҡан мәғлүмәттең этик принциптарын төҙөргә һәм уларҙы киң мәғлүмәт сараларының редакцияларына таратырға тейеш. Был этик принциптар милли һәм дини ҡараштарҙы көйләү буйынса ҡулланма булып тораСаҡ.

# ОТЧЕТТАРҘАН ҠОТОЛДОРА

**РФ Мәғариф һәм фән министрлығы төбәктәр министрлыҡтарына отчет документтары күләмен һәм төрөн кәметеү тураһында рәсми хат ебәрҙе.**

Мәғариф һәм фән министрлығының Йәмәғәт советының яңыраҡ үткән ултырышында, мәктәптәрҙәге саманан тыш бюрократия, шул арҡала уҡытыусыларҙың баш ауырыулыға әйләнеүе хаҡында һүҙ күтәрелде. Балалар уҡытыу урынына уларға ваҡытын төрлө отчеттар тултырыуға сарыф итергә тура килә. Чиновниктар педагогтарҙан белем биреү сифатын күтәреүҙе талап итә, кәрәкмәгән ҡағыҙҙар һорап, үҙҙәре үк был эште тоткарлай.

Педагогтарҙың әйткәненә ҡолаҡ һалып, министрлыҡ 30 мәктәптә мониторинг үткәрә. Мәктәптәрҙә йылдан-йыл отчеттар талап иткән күрһәтмәләр йышыраҡ килеүе раҫлана. Отчеттарҙың 80 процентын мәғариф системаһына ҡараған идаралыҡтар талап итә. Был талаптар йыш осраҡта федераль мониторингтар мәғлүмәттәренә арнала һәм статистик күрһәткестәрҙе ҡабатлай. Уҡытыусылар шулай уҡ мәктәптә үткәрелгән төрлө саралар, контроль эштәр һәм уҡыусыларҙың дәүләт аттестацияһы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе даими биреп торорға мәжбүр.

Төбәктәргә ебәрелгән хатта билдәләнеүенсә, мәғариф идаралығы органдары мәктәп эшмәкәрлеге тураһындағы мәғлүмәтте мәктәп сайттарынан алырға, ә план буйынса тикшереүҙәр йыл башында мәктәпте яңы уҡыу йылына ҡабул иткәндә генә үткәрелергә тейеш. Шулай уҡ министрлыҡ мәктәптәргә өлгәште күрһәткән электрон журналдарға күсергә тәҡдим итә. Был һәр синыфтың өлгәше тураһындағы мәғлүмәтте интернеттан алыу мөмкинлеге бирәсәк. Ә мәктәптәргә иһә мәктәп сайттарында мәғлүмәтте күберәк урынлаштырырға тәҡдим ителә. Тағы ла мәктәп директорҙарына һәм завучтарға мөһим тәҡдим: улар яңы эш хаҡын түләү системаһы сиктәрендә уҡытыусыларҙың эш сифаты тураһындағы мәғлүмәтте йылына бер тапҡыр ғына йыйырға бурыслы.

**Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы**

## Веналарҙың варикоз киңәйеүе һәм тромбофлебит

❖ Ҡан тамырҙарын дауалау өсөн һарымһаҡ, календула һәм ҡарағай энәләрен ҡушып яһалған ферменттар ҡулланырға була. Шулай уҡ ҡарағай энәләрен ваҡлап яһалған сәй эсергә була. Бының өсөн 1 ҡалаҡ порошокты 0,5 литр ҡайнар һыу менән 1 сәғәт төнәтеп, көнө буйы ярты стакан төнәтмә эсергә. ❖ Әремдең (полынь серебристый) япраҡтарын һәм сәскәгә төймәләнгән бөрөләрен өҙөп алып, ныҡ итеп ваҡларға. 1 ҡалаҡ ошо әремде 1 ҡалаҡ әсе һөт менән бутарға, марля өҫтөнә тигеҙ итеп һыларға һәм веналар киңәйә башлаған урынға һалып, бәйләргә. 3-4 көн дауамында шулай эшләгәндән һуң, ял итеп алырға. Был дауаны йәй ҡулланыуы уңайлы. ❖ Веналарҙың варикоз киңәйеүендә бер тигеҙ өлөштә көнбағыш майы, спирт һәм һыу алығыҙ һәм болғатығыҙ. Килеп сыҡҡан дарыу менән туҡыма салфетканы сылатып, веналарға компресс һалырға. ❖ Түбәндәге майҙы үҙеңә яһап алырға ла була: 100 грамм зәйтүн майы, 8 грамм аҡ балауыҙ, 20 грамм ҡарағас сайыры, 15 грамм аҡ май. Уларҙы бергә бутап, талғын утҡа ҡуйығыҙ, болғатып тороғоҙ, барлыҡҡа килгән күбеген алып ташларға кәрәк. Банкаға һалырға. Марляға һылап, проблемалы урынға ҡуйырға. ❖ 250 грамм таҙартылған һарымһаҡты ваҡ тешле ҡырғыстан йәки ит турағыстан үткәреп, 350 грамм шыйыҡ бал ҡойорға, болғатырға һәм аҙна буйына ултыртып ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 40 минут алда 1-әр ҡалаҡлап ашарға. Дауаны өҙмәйенсә, 2-3 ай дауам итергә. ❖ 0,5 литрлы шешәгә яңы ғына өҙөлгән каланхоэ япраҡтары тултырығыҙ һәм өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойоғоҙ. Ҡараңғы урынға ултыртып ҡуйығыҙ һәм ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп, болғатып тороғоҙ. Бер аҙнанан һуң был төнәтмәне үксәнән башлап, аяҡҡа һөртөп сығығыҙ. Аяҡтарҙың ауыртыуы шунда уҡ баҫыласаҡ, әммә тулыһынса дауаланыу өсөн процедураны 2-3 ай ҡабатларға кәрәк. ❖ Яңы өҙөлгән помидор, ҡыярҙы турап, тромбофлебит йәки варикозлы ҡан тамырҙарына бәйләргә. Бер тәүлек торорға, иртәнсәк тағы алыштырырға. Дауалау ваҡыты 2 ай. Дауаланған мәлдә емешеләк, йәшелсә диетаһын һаҡлағыҙ. ❖ Тәжрибә күрһәтеүенсә, ауыртҡан урынға лимон киҫәге бәйләү ҙә яҡшы һөҙөмтә бирә. Башта 3-4 сәғәт тирәһе тире әсетәсәк, һуңынан ул да үтә. ❖ Тромбофлебит ваҡытында медицина һөлөгө ҡуйыу ҙа яҡшы.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Өсөнсө дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Мөхәммәт бәйғәмбәргә арналған дәрестә Унын кешелек сифаттарына нығ иғтибар итергә һәм уҡыусыла унын шәхесе аша ыңғай сифаттар тәрбиәләргә тырышырға кәрәк. Бәйғәмбәр тормошондағы ҡайһы бер ваҡиғаларҙы риүәйәт итеп һөйләү яҡшыраҡ булыр. Мөхәммәттең етем үҫеүе, кешеләргә ялланып эшләүе, эшһөйәр булыуы һәм саф намыҫлы, хыянатһыҙ хеҙмәт итеүе тураһында риүәйәттәр бик күп. Хатта Тоғро тигән ҡушаматы ла булған Унын. Мөхәммәттең иҫ китмәле ихласлығына, күңеленен сафлығына һоҡланып та, аптырап та, ни өсөн шулай булып үҫкәнлегенең сәбәбенә төшөнөргә тырышып, ошондай риүәйәттәр уйлап сығарылғандыр, тип аңлатыу бала күңеленә ятышлыраҡ алым булыр. Дәфтәргә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тыуған ҡалаһын һәм йылын, өйләнеү йылын, ҡатынының, балаларының исемдәрен яҙҙырығыҙ.

### Өсөнсө дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Был дәресте үткәндәрҙе ҡабатлауҙан башлап, уҡыусыларҙың үҙҙәренән матди байлыҡтың ни икәнен, матди байлыҡҡа ниҙәр ингәнен һөйләтергә кәрәк. Улар, әлбиттә, иң элек биналарҙы, ҡоролмаларҙы, ҡорамдарҙы һанап сығыр. Ошонан һуң дингә ҡағылған матди байлыҡҡа күсеп китергә һәм мәсеттәр, сиркәүҙәр, башҡа ғибәҙәтханалар эсендәге әйберҙәрҙең, һүрәттәрҙең, яҙыуҙарҙың, китаптарҙың, кейем-һалымдың, шәмдәлдәр һәм башҡаларҙың дини мәҙәниәткә инеүен аңлатып, диндең мәҙәни үҫешкә ни тиклем тос өлөш индереүен билдәләргә кәрәк. Ә был матди байлыҡты кемдәр тыуҙырған, тигән һорау ҡуйып, рухи байлыҡ тураһында һөйләүгә күсергә кәрәк. Оҫталарҙы әҙерләү, уҡытыу, тәҙәү-биҙәү һөнәре, ижад, яҙыу-һыҙыу, шиғри әҫәрҙәр, риүәйәттәр, хикәйәттәр, легендалар, йырҙар һәм башҡалар барлыҡҡа килә башлай. Шулай итеп, рухи байлыҡ туплана. Ошо ысул менән дәрестең темаһын асырға һәм аҙаҡ дөйөмләштереп һығымта яһарға ғына ҡала.

Дәфтәргә: "Мәҙәниәт - ул кешелек донъяһының үҙ тарихында барлыҡҡа килтергән матди һәм мәҙәни ҡиммәттәре," - тигән аңлатманы яҙырға һәм күмәкләп ҡабатларға кәрәк. Матди мәҙәниәткә, рухи мәҙәниәткә ниҙәр инә - уҡыусылар үҙаллы уйлап яҙһын. Мөмкинлек булһа, һүрәттәр табып, төрлө дини ғибәҙәтханаларҙы тыш яғынан да, эске йыһаздарын да күрһәтеп, таныштырыу ҙа яҡшы булыр.

### Өсөнсө дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Тәбиғи тәбиғәт менән мәҙәни тәбиғәттең айырмаһын уҡыусылар нығыраҡ иҫтә ҡалдырһын өсөн, дәфтәргә яҙҙырып ҡуйыу отошло булыр. Тәбиғи тәбиғәтте ниҙәр тәшкил итә? Мәҙәни тәбиғәткә ниҙәр инә? Мәҙәни тәбиғәт үҙ сиратында тағы ике төргә бүленә: матди мәҙәниәт һәм рухи мәҙәниәт. Шул уҡ ваҡытта ер йөҙөндә йәшәгән төрлө халыҡтарҙың матди мәҙәниәте лә, рухи мәҙәниәте лә бер-береһенән айырыла. Уға халыҡ йәшәгән географик шарттарҙың да, традицияларҙың да, шөғөлдәренең дә йоғонтоһо ҙур. Мәҫәлән, йылы яҡтарҙа ҡалын стеналы, йылытылған ишек-тәҙрәле йорттар тәҙәмәйҙәр, быйма, тун кейеп йөрөмәйҙәр. Шулай булғас, уларҙа быйма баҫыу, тире иләү кеүек кәсеп тә, был кәсеп менән бәйле һөнәр ҙә, эш ҡоралдары ла юҡ. Тимәк, уларҙың атамалары ла уйлап сығарылмаған. Күмәк көс талап иткән шөғөл менән йәшәгән халыҡтарҙа туғанлыҡ, үҙ-ара ярҙам итешеү көслө. Тимәк, күмәк тәрбиә традицияһы барлыҡҡа килә. Күмәк урында кеше үҙенең холҡон башҡаларҙыҡы менән сағыштырып ҡарай башлай. Аралашырға, йәшәргә ҡамасаулаған насар ғәҙәттәрен бөтөрөргә тырыша. Ошолайтып үҙтәрбиә барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙа йәйләүгә күсенеү, тирмә ҡороу, йорт һалыу, мал бағыу, урман эштәре, ҡатын-ҡыҙҙар ғына башҡара торғандарҙан тула баҫыу, кейеҙ баҫыу, дебет эшкәртеү һәм башҡа шундай эштәр өмәләр менән башҡарылған. Шулай итеп, матди байлыҡ тыуҙырыу барышында кешенең әхлаҡи сифаттары тәрбиәләнгән.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# УҢЫШЛЫ КЕШЕ БУЛЫУ...

## илһөйәр булыуҙан тора



**Бала сағымда Ғәбиҙә инәйемдең йыш ҡабатлаған бер мәҡәле иҫемдә уйылып ҡалған: "Бала насарҙан ғибрәт алмай - үрнәк ала". Был мәҡәл бөгөнгө көндә иғтибарҙы тәү сиратта нимәгә йүнәлтергә кәрәк булыуы тураһында һөйләй.**

Балаларыбыҙҙы көслө рухлы, халҡын, мәҙәниәтен яратҡан, ихтирам иткән, үҙ телен һыу кеүек эскән шәхестәр итеп тәрбиәләү - беҙҙең төп бурыс. Шуға күрә бөгөн, беҙгә бирелгән хоҡуҡтарҙы тулыһынса файҙаланып, булған закондар нигеҙендә, мәктәптәрҙә туған телдә уҡытыуҙы талап итергә тейешбеҙ. Ошо талапты үтәү республика Президентының, Мәғариф министрлығының, бөтә етәкселәрҙең иң изге бурысы һәм ғәмәли эше тип һаналырға тейеш. Әгәр ҙә балаларыбыҙ үҙ туған телендә уҡымаһа, милләт тамырына балта сабыла.

Беҙ был һынауҙы үттек бит инде, совет заманында туған телен белмәгән бер нисә быуын маңҡорттар үҫте. Ә бит кешенең барлыҡ тормошо, карьераһы, уңыштары үҙенең туған теленә, халҡына, республикаһына мөнәсәбәтенән дә тора. Йөрәгендә илһөйәрлек, телһөйәрлек булмаған кеше нимә хаҡына йәшәй, хеҙмәт итә? Ундайҙарҙың күбеһенең тормошо уңышһыҙ булыуын әллә күпме миҫалдар аша раҫлап була бит.

Ошолар тураһында уйланып йөрөгәндән һуң, Президентыбыҙға хат та яҙғайным, уға еткергән теләктәремде гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашмаҡсымын. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына ярашлы, башҡорт теле рус теле менән бергә дәүләт теле һанала. Шуның өсөн башҡорт телен дәүләт аппаратында, эш ҡағыҙҙарында әүҙем ҡулланыуҙы яйға һалырға кәрәк. Башланғыс синыфтарҙа бөтә предметтарҙы ла башҡорт телендә уҡытыу мотлаҡ. Республиканы барлыҡҡа килтергән башҡорт халҡының теленә, мәҙәниәтенә ҡарата толерантлы булырға өйрәтеү өсөн Башҡортостанда йәшәгән бөтә милләт вәкилдәрен дә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәтеүҙе дауам итергә. Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ мәктәптәрҙә генә түгел, ә юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарында ла уҡытылырға тейеш. Барлыҡ торлаҡ пункттар, туҡталыштар атамаһын башҡортса һәм русса яҙып элергә. Балалар баҡсаларында башҡорт балалары өсөн айырым төркөмдәр булдырырға. Киләсәктә Башҡортостан Президентын халыҡ тарафынан һайлау хоҡуғын кире ҡайтарырға. Батша заманындағы кеүек, Үҙәктән хакимдар тәғәйенләү демократик илгә хас нәмә түгел, тип һанайым.

**Марс КӘРИМОВ.**

ҺАБАҠТАР

# ДИН ТОТМАЙ ҘА...

## иманлы булырға мөмкин



**"Киске Өфө"лә Ләйсән Әмированың "Ахмаҡлыҡ ҡына... туҙмай ҙа, иҫкермәй ҙә, үҙгәрмәй ҙә" мәҡәләһен уҡығас, фекерем менән бүлешергә булдым. Ахмаҡлыҡ ул дөрөҫ тәрбиә алмауҙан киләләр. Ләкин ул тәҙәтеп булмаҫтай нәмә түгел. Ахмаҡлыҡты ла дөрөҫ юлға һалып була, тигән фекерҙәмен.**

Тәүге балабыҙ тыуған йылда фатирлы булдыҡ. Яңы йорт, яңы күршеләр, береһе лә таныш түгел. Бер көндө, шырпым бөткәс, унайһыҙ булһа ла күршемә индем (элек әлеге кеүек аҙым һайын магазиндар юҡ ине, ирем дә эштән ҡайтмаған). Күршемә: "Бер ҡап шырпы биреп тормаҫһығыҙмы, иртәгә индерермен", - тип мөрәжәғәт иттем. Сибәр генә мәрйә: "Көнбайыш илдәрендә ваҡ-төйәк һорап күршеләрен бимазаламайҙар", - тип асыуланһа ла, йомошомдо үтәне. Әлбиттә, икенсе көнөнә үк бурысымды ҡайтарып бирҙем.

Күп тә үтмәне, күршем үҙе үтескә аҡса һорап инә башланы. Уның бер туҡтауһыҙ йә ҡулдәк, йә кофта һатып алыу ғәҙәте бар икән (әлеге ваҡытта "шопинг" ауырыуы тип атайҙар уны). Үҙе миңә: "Һин ни өсөн минең тулы (йомро) тәнле икәнлекте беләһеңме? Сөнки мин нимә теләйем, шуны һатып алам, нимә теләйем, шуны ашайым", - тип әллә маҡтана, әллә мыҫҡыл итә, аңламаҫһың. Теләһә ниндәй сепрәк-сапраҡтары менән маҡтаныуына асыуым килһә лә, түҙәм, күрше бит.

Ҡапыл күршем дин юлына баҫты. Сиркәүгә йөрөй башланы. Холҡо ҡырҡа үҙгәрҙе. Аптырап: "Нисек диндар булып киттең?"- тип көнләшеп һораным. Ул: "Югарынан бирелде", - тип кенә яуапланы. Хәҙер инде ул үҙе беҙҙең фатирға инеп: "Әйҙә, ҡунаҡ булырһың. Сәйҙәр эсеп, һөйләшеп ултырырбыҙ. Балаларыбыҙ ҙа бергә уйнап алыр", - тип саҡырып индерер, ҡайтырға сыҡҡанда мотлаҡ берәй бүләк тоттороп булды. Бер саҡ ауырып дауаханаға эләккәйнем, күстәнәстәр тотоп, хәл белешергә килеп еткән. Бына дин кешене нисек үҙгәртә икән ул! Ахмаҡ кешеләй ҡыланыштары, сепрәк-сапраҡҡа табыныуҙары ла бөттө уның. Ә сиркәүгә барып ҡайтһа, сафланып, нурланып киткәндәй тойола ине.

Мин дин тотмаһам да, күршем минең дин тотмаҫ ҙа иманлы булыуымды хөрмәт итә. Шул сәбәпле дуҫ, татыу йәшәйбеҙ. Ул минең үҙ өлөшөмә шөкөр итеп, бер ҡасан да меҫкенләнмәй, зарланмай, ғорур йәшәүемде аңлай.

**Фәғилә УСМАНОВА.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# ҒӘҘЕЛ ҺҮҘ...

## аҙҙырмай

- Файҙалы эш беләк талдырмай, ғәҙел һүҙ кеше аҙҙырмай.
- Аяғың кәкре булһа ла, ҡулың кәкре булмаһын.
- Күңелемдә һиллек, тип тынысланма, һиллектә лә һағыш бар.
- Күңеле сәмле - елле егет, сәмһеҙе - һәр нәмәнән төңөлгән тере мәйет.
- Үс алырға теш ҡайрама, тешһеҙ игеүгә әйләнер ыныйы тештәрең.
- Тормошта өнһөҙ-күҙһеҙ булма - ҙур ҡазаға юл асыла.
- Үҙ төйәген һөйгән кеше ерен пыран-заран килтермәҫ һәм һатмаҫ.
- Кеше ғүмере, әйтерһең, ике кеҫә: береһенә аҡыл менән мал туплана, икенсеһенә иҫәрлек менән сүп тула.
- Һәр бет үҙенсә - баса тунлымын, һәр иҫәр - әүлиә аҡыллымын, тип уйлай.
- Шат хәбәр осондора, ҡайғылыһы һөрөндөрә.
- Көнсөл көл сапсыр - ҡуҙы кешегә бәрелһә лә, саңына үҙе батыр.
- Ишек башында сыбығың торһон - тиҫкәрене "бейетһен", шайтанды ла ҡурҡытһын.
- Оҙон елкә дуҫыңды кибеп ҡатҡан дегет силәгенә иҫәпләә.
- Ҡарғалыуҙан ҡурҡып, телең бирмә - еңелеүгә юл асырһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВ менән башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының эҙе буйлап сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ.**

# МОЛДОВА БАШҠОРТТАРЫ



### Бәшәнәктәр менән ҡан-ҡәрҙәшлек

**Башҡорттарҙың иртә урта быуат тарихын өйрәнгәндә бәшәнәк материалдарына мөрәжәғәт итеү уларҙың тел, хужалыҡ-мәҙәни һәм хәрби-сәйәси яҡынлыҡтарын күрһәтә.**

IX быуаттың икенсе яртыһында X быуаттың тәүге яртыһында башҡорттар яҙма сығанаҡтарҙа бәшәнәктәр менән гел бергә телгә алынмайҙыр, тип уйларға кәрәк. Башҡорттарҙың ата-бабалары көнсығыш яҙмаларында баджгард, баджгирд, бажгир...) IX быуаттың икенсе яртыһында бәджнәктәр, баджнә (ҡайһы бер яҙмаларҙа баджак) һәм наукердлар менән Гурган (Арал) диңгеҙе эргәһендә уғыҙ, ҡарлуҡ, кимәктәрҙең берләшкән көстәренә ҡаршы һуғышта әүҙем ҡатнашҡан. Был ваҡиғаның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе әл-Мәҡдисиҙә бирелгән. Арал диңгеҙе эргәһендә башҡорттар менән бәшәнәктәр еңелә. Әммә был дүрт өлөштән торған туғандаштар берләшмәһе тарҡалмай. Уларҙың берләшмәһе тураһындағы факты 100 йыл тирәһе ваҡыт үткәс, Ҡара диңгеҙҙең төньяғындағы ваҡиғаларға бәйле, Әл-Масуди (вафаты 956-сы йылда) яҙмаларында табыла була. Әлеге берләшмә бында X - XI быуаттың беренсе яртыһында шул уҡ составта (бәшәнәктәр, бәджнәләр, баджгардтар, наукердтар) хакимлыҡ итә. X быуатта Ҡара диңгеҙҙең төньяғындағы халыҡтарҙы һәм ундағы ваҡиғаларҙы һүрәтләп, әл-Масуди 932-се йылда дүрт туғандаш төрки халыҡ - бәджнә, баджгард, баджнәк һәм наукерд Валандар ҡалаһы өсөн Византия менән һуғыша, ...әммә Константинополь ҡалаһына юллана, тип яҙа.

Ошо уҡ дүрт халыҡ (бәджнә, баджгард, баджнәк, наукерд) хазарҙар һәм аландар менән бәйле ваҡиғаларҙа тағын телгә алына. Шулай уҡ көнсығыш авторҙарында уларҙың славяндарға ҡаршы барымталары тураһында ла мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Ике быуаттан ашыу Ҡара диңгеҙҙең төньяғындағы бөтә ваҡиғаларҙа ла әүҙем ҡатнашҡан башҡорт менән бәшәнәктәр боронғо урыс кенәҙҙәренең берләшкән көстәренән еңелгәндән һуң, XI-XII быуаттарҙа Ҡара диңгеҙ буйы далаларынан Венгрияға күсенә. Бында уларҙы әҙ генә һуңғараҡ үҙенең яҙмаларында Әл-Ғарнати теркәп ҡалдырған. Был автор Испанияның (хәҙерге тел менән әйткәндә) Гренада кешеһе булғанға күрә, тарихҡа Әл-Ғарнати булып теркәлгән.

Әл-Ғарнати тигәндән. Былтыр Өфөлә конференцияға килгән көнсығыш телдәре белгесе, тарих фәндәре докторы Шәмсетдин Камалетдинов тигән бер үзбәк ғалимы менән танышыуға насип булды. Һөйләшеп ултырғанда: "Бәшәнәктәр менән башҡорт тарихсыларынан кем шөғөлләнә, улар бит һеҙҙең бер өлөшөгөҙ", - тип ҡыҙыҡһынып һорашып ултырғайны ул. Уның һөйләүенә ҡарағанда, уғыҙ, ҡарлуҡ, кимаҡтарҙың берләшмәһенән Гурган (Арал) күле буйындағы һуғышта еңелгәндән һуң бәшәнәктәрҙең һәм башҡорттарҙың бер өлөшө Каспий диңгеҙенең көньяғында дәүләт ҡороп йәшәп алғандар, имеш. Аҙаҡтан уларҙың Андалусияға (Испанияла - **З.Ә.**) күсенеп китеүҙәре тураһында ла мәғлүмәттәре менән уртаҡлашты был ихлас үзбәк ғалимы. Андалусия тураһында ишеткәс, "Бына ҡайҙан килә икән Әл-Ғарнатиҙың башҡорттар менән ҡыҙыҡһыныуының сәбәбе", тип ҡуйҙым.

Башҡорттарҙы ике быуаттан ашыу бәшәнәктәр менән гел бергә теркәү хужалыҡ итеү ысулы, мәҙәниәттәре һәм хәрби-сәйәси мәнфәғәттәре яҡынлығынан ғына түгел. Был яҡынлыҡ уларҙың уртаҡ бер сығышлы булыуынан һәм дә тел яҡынлығынан да килә. Быны иҫбатлаусы мәғлүмәттәр көнсығыш авторҙарында ярайһы уҡ күп һаҡланған, тик әлегә унда-бында һаҡланып ҡалған бындай мәғлүмәттәрҙе бергә туплап өйрәнгән кеше генә юҡ. Билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе, үҙ халҡының тарихын төплө белгән М. Өмөтбаевтың Ибн Халдунға (XIV быуат) һылтанып, бәшәнәктәр ҡаңны, дыуан, табын һ.б. менән бер рәттән, башҡорт халҡы составына ингән, тигән яҙмаһы бар. Бәшәнәктәр, уларҙың ҡыпсаҡтарҙан тар-мар ителгәндән һуң Көньяҡ Уралға килеп, үҙҙәренең туғандары булған башҡорттар араһына инеүҙәре тураһында "Уҙаҡ-Туҙаҡ - бала бәшнәк ярсығы" тигән башҡорт эпосында ла телгә алына.

Башҡорттарҙың бер өлөшөнөң Венгрияла йәшәүен көнсығыш авторы Яҡут Хәмәви үҙенең "Мугджам эль-булдан" хеҙмәтендә лә билдәләй. Яҡут Хәмәви Халеб ҡалаһында (Сүриә) башҡорт талиптарын осратыуын, уларҙың, йәғни "башгирд" халҡының "хункар" тип аталған Европа халыҡтары ("афранджей") араһында йәшәүен хәбәр итә. Хәмәвиҙың информаторҙары һүҙҙәренә ҡарағанда, "башгирдтар" Ислам динен тотҡан һәм Венгрия короллегенән сигендә "һәр береһе ҡала кеүек булған" үҙҙәренең ауылдарында йәшәгән. "Хункар"ҙарҙың батшаһы "башгирд"тарға үҙ ауылдарын ҡәлғә диуарҙары менән уратып алырға рөхсәт итмәгән, уларҙың үҙенә ҡаршы сығыш яһауынан ҡурҡҡан. Юл айҡан Венгрия тураһында әҙерәк аңлатма килтереп китеү кәрәк. Элекке Венгрия дәүләтенең территорияһы хәҙерге Венгриянынҡынан күпкә ҙурыраҡ булған. Беренсе бөтә донъя һуғышынан һуң, 1920 йылда, Трианон килешеүҙәре буйынса уларҙың күп ерҙәре тартып алынып, икенсе дәүләттәр ҡулына бирелә. Европа дәүләттәренә ныҡ көслө, яусыл һәм ҙур Венгрия кәрәкмәй. Мадьяр ерҙәренең иң ҙур Трансильвания тигән өлөшө румындарға бирелә. Тимәк, беҙ боронғо Венгриялағы башҡорттар тураһында уҡығанда һәр ваҡыт оло Венгрияны күҙ уңында тотоп, ата-бабаларыбыҙҙың эҙҙәрен бөтә Үҙәк Европанан эҙләргә тейешбеҙ.

1791 йылда Хәҙерге Румынияла, төп халҡы мадьярҙар булған Трансильванияның Надь Сент Миклош тип аталған ерендә мифологик сюжеттарҙан төрлө күренештәр һүрәтләнгән 23 алтын һауыттан торған хазина табыла. Надь Сент Миклош табышы әлегә тиклем ғилми яҡтан ныҡлап, етди тикшерелмәгән. Был табышҡа ҡағылышлы мәҡәләләрҙең авторҙары күпселек осраҡта хазинаның бәшәнәктәрҙеке булыуы ихтималлығын ғына әйтеп китә. Бәшәнәктәрҙең мифологик һәм фольклор материалы фәнгә әлегә билдәһеҙ, әммә бәшәнәктәр менән яҡын туған башҡорттоң бай һәм үҙенсәлекле мифологияһы беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып килеп еткән һәм ул Надь Сент Миклош табышын өйрәнгәндә файҙалы булмаҡсы. Сөнки баяғы предметтарҙа сағылыш тапҡан мифологик сюжеттар башҡорт мифологияһындағы сюжеттар, мотивтар менән тап киләләр, тимәк, беҙҙең материалдар аша аңлатыла алалар.

Венгрияға барып эләккән башҡорттар, үҙҙәрен уратҡан католиктарҙың динен ҡабул итеп, ваҡыт үтә бара мадьярлашып юҡҡа сыҡҡандар, әммә эҙһеҙ юғалғандар, тип әйтеп булмай. Хәҙерге ваҡытта мадьяр телендә бик күп төрки һүҙҙәре барлығы билдәле. Һуңғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, хәҙерге мадьяр телендә телселәр 800-ҙән ашыу төрки тамырлы һүҙ булыуын асыҡлаған. Уларҙың күпселеген белгестәр сыуаш тибындағы төрки теленә индерә. Урта быуаттарҙа сыуаштарҙың ата-бабаларының Венгрияла йәшәп китеүе тураһында фәндә мәғлүмәттәр юҡ. Ә башҡорттар иһә был илдә мадьярлашып, улар араһында юғалғанса, үҙҙәрен ярайһы уҡ танытып, күрһәтеп өлгөрәләр. Шуға күрә белгестәрҙең "сыуаш тибындағы төрки һүҙҙәре", тигәнен башҡорттарҙың ата-бабалары тарафынан (баджгарҙар, бәджнәктәр) ҡалдырылған, тип аңларға кәрәктер. Беҙҙең телебеҙ, телселәрҙең классификацияһы буйынса, һуңғы мең йыллыҡ эсендә ныҡ ҡыпсаҡлашыу кисерел, хәҙер төрки телдәренең болғар-ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡарай. Әммә, боронғо авторҙарҙың хеҙмәттәрендә һаҡланған мәғлүмәттәрҙән һәм дә үҙ еребеҙҙәге топонимик материалдарҙан сығып, боронғо башҡорттарҙың, бәшәнәктәрҙең теле, хазарҙарҙың һәм сыуаштарҙың ата-бабаһы булған болғарҙарҙың теленә бик яҡын булған, тип әйтергә мөмкин.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



## 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ... орден кавалерҙары

**Мирғәле Байғолов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Зауряд-есаул. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Үсәргән олоҫоноң Ҡансура ауылынан (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Башҡорт Кәнсере ауылы). 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһе, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге" миҙалы менән наградланған.

**Муклем Ҡонанбаев** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул. 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Алыштарҙа айырылып тора һәм "... Дневицк баталияһы килешеүенә тиклем булған эштәре өсөн" наградаға тәҡдим ителә. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ниғмәтулла Бирҙебаев** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Үсәргән олоҫоноң Иткол ауылынан (хәҙерге Ейәнсура районы). 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Үзбәк Аҡмырҙин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Йөҙ башы (сотник). 1-се Башҡорт полкы составында 1813 йылда Гродно эргәһендәге, Смоленск өсөн, Бородино алышында, Можайск, Малоярославец ҡалалары өсөн алыштарҙа, Данциг блокадаһында, Берлинды азат итеүҙә, Лейпциг алышында, Дрезден һуғышында, генерал-майор А. Х. Бенкендорфтың Голландияға рейдында, 1814 йылда Парижды алыуҙа һ.б. ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Бөшман-Ҡыпсаҡ олоҫоноң Кинйәбай ауылынан. 1812 йылда Мир эргәһендәге, 1815, 1816 йылдарҙа Ютербок тигән урындағы алыштарҙа ныҡ айырылып тора, уның ҡаһарманлығы өсөн 1813 йылдың 6 декабрендә йөҙ башы (сотник) дәрәжәһе бирелә; яҡшы хеҙмәте өсөн император ғәли йәнәптәренең рәхмәтенә лайыҡ була; Витенбург ҡалаһы эргәһендә 21-22 августа урядник булараҡ ҡаһарманлығы өсөн "Георгий тәреһе билдәһенә" тәҡдим ителә". Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһенә лайыҡ була. "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалы менән наградланған.

**Улда Дәүләтов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Йөҙ башы. 1-се Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 1813 йылдың 25 сентябрендә Кассель (Бөйөк Гессен герцоглығы) ҡалаһы эргәһендәге алышта айырылып тора. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Ғ. Соҡоройҙоң көслө башҡорт рухлы булыуы ла һоҡландыра мине. Ғөмүмән, революцияға тиклем йәшәгән башҡорттар киң мәғлүмәтле, белемле һәм ғилемле булған. Башҡорттарҙың ул саҡтағы яҙма мәҙәниәте лә бик ҡыҙыҡлы.*



**Билдәле тележурналист, яңы ҡарашлы тарихсы, отҡор телле сәсән Искәндәр Сәйетбатталов хаҡында яҙып сығыуыбыҙҙы осрашыуҙарҙа гәзит уҡыусыларыбыҙ һораны. Нисектер беҙ Искәндәрҙе тыуғанынан алып белгән кеүекбеҙ, беҙҙең күҙ алдында үҫте ул. Тәүҙә беҙ уны "Тамыр" телерадиостудияһында, тораҡ баш ҡала сәсәндәренең бәйгеһендә күрҙек, хәҙер ул Башҡортостан юлдаш телевидениеһында үҙенең бик мауыҡтырғыс һәм фәһемле тапшырыуҙарын алып бара. Тағы ла шуныһы: Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингәс тә ул "Тамыр"ҙа эшләй башлай, параллель рәүештә, үҙе студент көйөнә, университетта фәнни тикшеренеүҙәр башлай. Алдағы йылда кандидатлыҡ диссертацияһын яҡларға йыйына. Үҙ йәшенә ҡарата тик өлкәндәр генә башҡара алырлыҡ эштәргә тотона алыуының, үҫмер сағында уҡ шәхесе формалашып етеүенең нигеҙҙәре нимәлә? Әлбиттә, уның кескенә сағынан милли мөхиткә ылығыуынан килә был уңыштары. Юҡҡа ғына кеше тик үҙенең милли асылында ғына балҡый ала, тип әйтмәйҙәрҙер. Хәйер, быларҙың барыһы хаҡында Искәндәрҙең үҙенең әңгәмәһендә ишетерһегеҙ.**

## Ғафуриҙың яҙыу өҫтәлендә...

Бала сағым шаулы һәм мәшәҡәтле 90-сы йылдарға тура килһә лә, күңелемдә яҡты хәтирәләр ҡалдырҙы. Ул мәлемдең иң сағыу миҙгелдәрен иҫкә төшөргәндә, иң тәүҙә ҡартатайым менән баҡсаға барыуыбыҙ, әсәйем һәм атайым менән баш ҡала урамдары буйлап, тарихи һәм матур урындарҙы, атап әйткәндә, Салауат һәйкәлен, Туҡай урамындағы мәсетте ҡарап йөрөүҙәр хәтергә килә. Әсәйем Мәжит Ғафури музейында эшләгәс, бала сағымдың яртыһы шул музейҙа үтте. Музей эсендә экспонаттарға ҡағылмаҫҡа тырышып уйнап йөрөүҙәрем, Ғафуриҙың данлыҡлы әҫәрҙәре ижад ителгән яҙыу өҫтәлендә дәрес әҙерләүҙәрем бөгөнгөләй хәтеремдә. Йәйҙәрем, асылда, ҡартатайҙарымдың Шишмә районындағы баҡсаларында үтә ине. Һәр кешенең тыуған ауылы булырға тейеш. Минең дә, атай менән әсәйем Өфөлә тыуып үҫһәләр ҙә, үҙем дә икенсе быуын ҡала башҡорто булһам да, тыуған ауылым бар. Ул - ҡартатайым Ғәли Сәйетбатталов тыуған Күгәрсен районындағы Сәйетҡол ауылы. Мин унда тәүге тапҡыр 15 йәшемдә генә бара алдым һәм уны тәүге тапҡыр үҫмер кеше күҙлегенән ҡабул иттем. Хәҙер ул ауылда күберәк булырға, туғандар менән аралашып йәшәргә тырышам.

Журналист булып китеүемә ишара-йүнәлеш булырлыҡ бала сағымдағы бер ваҡиға иҫемдә. Бала сағымда мине ике балалар баҡсаһына йөрөттөләр. Тәүгеһе уңышһыҙ булып сыҡты, сөнки мине иртә бирҙеләр һәм унда һөйләшә лә белмәгән балалар булды. Әсәйем мине алырға килгәндә мин уға: "Һөйләшмәгән балаларға бутҡа һәм тәмлекәстәр әҙерәк һалалар, сөнки улар был хаҡта ата-әсәләренә әйтә алмайҙар", - тип әйткәнмен. Һәр хәлдә, минең киләсәктә журналист булыуым ошо логикала сағылғандыр, йәғни: "Һорамаған балаға имсәк бирмәйҙәр". Бының менән әсәйемә тәүге тапҡыр үҙ ғүмеремдә осраған ғәҙелһеҙлек ваҡиғаһын еткергәнмендер инде.

Ғөмүмән, 90-сы йылдар шундай ҡаршылыҡлы заман булды. Өйҙә бер төшөнсәне яҡшы тип өйрәтһәләр, урамға сыҡһаң, бөтөнләй икенсе ҡағиҙәләр өҫтөнлөк итте, беҙҙең алда бер генә маяҡ та булманы. Шәхес идеалы ла юҡ ине, һәр кем үҙенә-үҙе идеал һайланы. Шуға күрә дөрөҫ тормош юлын һайлау беҙҙең быуын йәштәренә бик ҡыйын булды. Ҡыҫҡаһы, урамда һуғышырға ла, һүгенергә лә тура килде. Беҙҙең ҡартатайҙар, атайҙар уйлап бөтөрмәгән нәмәләрҙе үҙебеҙгә уйлап сығарып йәшәргә лә кәрәк ине.

## Башҡортса уйларға өйрәндем

Милли мөхиткә эләгеүем дә осраҡлы килеп сыҡты, тип әйтә алам. Сөнки минең бала сағым үткән 90-сы йылдар башында Өфөлә башҡорт мөхите хәҙерге һымаҡ киң түгел ине. 1998 йылда мин икенсе синыфҡа барғанда беҙҙең йорт янында, Коммунистик урамда 144-се башҡорт гимназияһы асылды. Мин ул саҡта башҡорт телен бөтөнләй тиерлек белмәй инем, сөнки ҡалала тыуып үҫкән совет балалары булған атайым менән әсәйем дә минең хәлдә инеләр. Мине мәктәпкә йөрөүе яҡын, урам аша сығырға кәрәкмәй, тигән прагматик принциптан сығып, ошо гимназияға уҡырға бирҙеләр. Ошо гимназияла ғына мин башҡорт телен өйрәнә башланым, тыуған әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ менән башлап таныштым. Әгәр ҙә ошо гимназия булмаһа, мин дә Өфө ҡалаһының урыҫ телен генә белгән башҡорт балаларының береһе булыр инем. Хәҙер шулай уйлайым: ярай әле йортобоҙ шул гимназияға яҡын булған һәм атайым менән әсәйем мине унда уҡырға алып барған. Үҙ халҡың менән бергә булыу, бер ҡатарҙан атлау - бәхет, был кешегә бик күп нәмә бирә. Ә бит күпме йәштәштәрем ошо мөхиткә эләгә алмайынса, милләтебеҙҙән айырылып, ситтә тороп ҡалды. Мин бында уларҙы ғәйепләргә теләмәйем, был уларҙың бәләһе, тотош илдең, милләттең бәләһе.

Минең ынтылышымды күреп, Ғәли ҡартатайым ярҙамға килде. Ул дәрес әҙерләгәндә кәңәштәре, дәреслектәре менән ярҙам итә торғайны. Һуңынан уның шәхси китапханаһы менән таныштыу минә иҫке төрки телен өйрәнеүҙә, тюркология менән ҡыҙыҡһына башлауҙа этәргес көс булды. Ҡартатайым үҙенең шәхесенең ауралы менән лингвистикаға китеүемә йоғонто яһаны, әлбиттә. Фәнни яҡтан уның биргән кәңәштәре һаман да ярҙам итә. Уның һәр ваҡытта ла материалдан, тәүсығанаҡтан сығып эш итергә кәрәк, тигән кәңәшен иҫемдә тотам. Хәҙер инде Өфөлә башҡорт мөхите киңәйгәс, балалар баҡсалары, мәктәп-гимназиялар, "Тамыр" телерадиостудияһы эшләгәс, Интернетта башҡорт телле биттәр барлыҡҡа килгәс, милли мөхиткә ылығыуҙың мөмкинлектәре лә артты. Беҙгә уларҙы файҙаланырға ғына кәрәк.

Туған телебеҙҙе өйрәнеүҙә уҡытыусыларым ҙур роль уйнаны. Иң ҙур рәхмәттәремде синыф етәксем Йәмилә Сиражетдиноваға еткерәм. Саф башҡортса һөйләшергә тырышыуым да уның йоғонтоһонан килә. Ә инде телмәремдә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырмаҫҡа үҙем тырышам һәм "вроде бы" килеп сыға. Тәүге осорҙа тәүҙә урыҫса уйлап, шуны тәржемә итеп башҡортса һөйләшһәм, һуңғы ике-өс йылда башҡортса уйларға өйрәндем. Бының өсөн махсус күнекмәләр эшләмәнем, бары тик яҡындарым менән күберәк башҡортса һөйләшергә, башҡортса китаптар, гәзит-журналдар уҡырға тырыштым, милли музыка тыңланым. Башҡорт телендә көндәлек алып барыуым да башҡортса уйлап өйрәнергә ныҡ ярҙам итте. Көндәлек яҙғанда үҙ-үҙем менән башҡортса һөйләшеп, эске телмәремде ҙур ауырлыҡ менән башҡорт теленә күсерҙем. Мин ҡартатайымдың Сәйетҡол ауылына барһам, ундағы кешеләр: "Һин әллә башҡортсаға дәреслектән өйрәндеңме, бигерәк гәзитсә һөйләшәһең", - тип әйтәләр. Туған телемә ата-әсәйемдән түгел, ҡала мәктәбендә туған тел дәресендә өйрәнеүемдән килә был хәл.

## Тарихтан китә алманым

Атайым менән әсәйем тарихсы булғас, мин һәр ваҡыт тарихҡа мөнәсәбәт мөхитендә йәшәнем. Әммә алтынсы-етенсе синыфта уҡығанда уларға үҫкәс тарихсы булырға теләүем хаҡында әйткәндә, улар: "Хет ниндәй һөнәр, тик тарихсы түгел", - тигән ҡырҡа һүҙҙе әйттеләр. Улар был һүҙе менән тарихсы дипломын алған кешенең мөмкинлектәре әҙерәк булыуына ишараланы. Ваҡыт үтеү менән үҙемдә лә тарихҡа ҡарағанда хәҙерге, заманса, актуаль хәл-ваҡиғалар ҡыҙыҡһындыра башланы. Шуның өсөн миндә журналист булыу теләге уянды. Был маҡсатыма өлгәштем, әммә шул уҡ ваҡытта тарихҡа бәйле журналистикаға килдем. БДУның журналистика булегенә уҡырға ингәс, мине "Тамыр" студияһына эшкә алдылар. Унда өс йыл буйы үҫмерҙәр өсөн урыҫ телендә "Телекомпас" тигән тапшырыуҙар алып барҙым. Журналистикала тәүге профессиональ мәктәбем ошо булды. Өс йыл үткәс, Айрат Зәйниев тигән дуҫым телевидениела Салауат Хәмиҙуллиндың яңы тарихи тапшырыуҙар редакцияһын асыуы хаҡында әйтте. Салауат ағай менән мине Айрат таныштырҙы. Сценарий яҙҙырып ҡаранылар ҙа, мин шул редакцияла эшләй башланым. Туғандарымдың теләге буйынса тарихтан ни тиклем генә алыҫырраҡ торорға теләһәм дә, мин шундай уҡ тиҙлектә тарихҡа яҡынланым. Яҙмыштан уҙмыш юҡтыр инде.

Тарих бик ҡыҙыҡлы фән. Шул уҡ ваҡытта тарихты яҡшы белеүсе халҡы алдында оло яуаплылыҡ та йөрөтөргә бурыслы. Ни өсөн тигәндә, тарихты белеү - бер нәмә, икенсенән, тарихи рухҡа, ундағы шәхескә тап килеү ҙә мөһим. Беҙ тарихи үткәнебеҙҙән көмәрәк, насарыраҡ булырға тейеш түгелбеҙ. Тарихыбыҙҙы өйрәнеү беҙҙе, бер яҡтан, стресс хәләнә лә индерә. Сөнки Ғәли Соҡорой кеүек шәхестәрҙе өйрәнгәндә улар осраған ауырлыҡтарҙы күрәһең дә, уларҙың алдында үҙеңде бәләкәй генә бала кеүек итеп тояһың.

Әгәр ҙә беҙ тарихи үткәнебеҙгә ҡарап, ниндәйҙер һығымталар яһамаһаҡ, һабаҡ алмаһаҡ, тарих ҡабатлана. Ә инде был ваҡытта башҡа милләттәр киләсәккә ҡарай ниндәйҙер етди аҙымдар яһаған ваҡытта үҙ тарихынан һабаҡ алмаған милләт, дәүләт бер түңәрәк буйлап ҡына әйләнеп йөрөргә мәжбүр.

## Фәнгә ынтылышым

Командировкаларға сыҡҡанда халыҡ менән урындағы һөйләштәрҙә аралашырға тырышам. Был лингвистика йәһәтенән күп нәмә бирә, кандидатлыҡ диссертациямдың темаһын билдәләгәндә лә сағылды был халәтем. Диссертациямдың темаһы - "Владимир Иванович Даль менән Мөхәммәтғәли Соҡоройҙың тарихи хеҙмәттәренә лингво-культурологик анализ". В. Даль менән Ғ.Соҡоройҙоң бер үк темаға бер үк сығанаҡтарҙан сығып яҙған әҫәрҙәре бар, хеҙмәтемдә мин уларҙың эшендә сағылған милли мәҙәниәт һыҙаттарын күҙаллайым.

Мине В.Далдең башҡорттар хаҡында яҙған әҫәрҙәре, хеҙмәттәре күп булыуы хайран итте. Ул хатта ҡайны бер башҡорт тәүарихтарын үҙе тәржемә иткән. Мәҫәлән, уның "Жизнь Дженгиз-хана" тигән әҫәре "Сыңғыҙнамә"нең тәржемәһе. Ә был әҫәр башҡорттар араһында йөрөгән ҡульяҙманан Ҡаҙанда баҫып сығарылған була. Унда ваҡиғалар Урал буйында бара, Башҡортостандағы ер-һыу атамалары осрай, башҡорт бейҙәре тураһында һүҙ бара.

Ғ. Соҡоройҙоң көслө башҡорт рухлы булыуы ла һоҡландыра мине. Ғөмүмән, революцияға тиклем йәшәгән башҡорттар киң мәғлүмәтле, белемле һәм ғилемле булған. Башҡорттарҙың ул саҡтағы яҙма мәҙәниәте лә бик ҡыҙыҡлы. Үкенескә күрә, беҙ әле был мәҙәниәттең ҙур өлөшө менән таныш түгелбеҙ.

Башҡортостандың төньяҡ өлөшөндә, Тәтешле, Асҡын, Ҡариҙел райондарында әле ғалимдарыбыҙҙың иғтибарынан ситтәрәк торған тарихи ҡомартҡылар бик күп. Мәҫәлән, Ҡариҙел районының Яҡуп ауылы янында өс тарихи зыярат бар. Береһе - XIX, икенсеһе XVII быуатҡа, өсөнсөһө унан да иртәрәк дәүергә ҡарай. Өсөнсөһөн бина тип тә, кәшәнә тип тә атап булмай, таштан эшләнгән үҙенсәлекле бер ҡоролма. Шунда "Таш мәсет" тип аталған бер ҡоролма ла бар.

ДОНЪЯЛА ТЕЛЕВИДЕНИЕ

бөгөн мәҙрәсәлә

*Туған телебеҙҙе өйрәнеүҙә уҡытыусыларым ҙур роль уйнаны. Иң ҙур рәхмәттәремде синыф етәксем Йәмилә Сиражетдиноваға еткерәм. Саф башҡортса һөйләшергә тырышыуым да уның йоғонтоһонан килә. Ә инде телмәремдә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырмаҫҡа үҙем тырышам һәм "вроде бы" килеп сыға. Тәүге осорҙа тәүҙә урыҫса уйлап, шуны тәржемә итеп башҡортса һөйләшһәм, һуңғы ике-өс йылда башҡортса уйларға өйрәндем. Бының өсөн махсус күнекмәләр эшләмәнем, бары тик яҡындарым менән күберәк башҡортса һөйләшергә, башҡортса китаптар, гәзит-журналдар уҡырға тырыштым, милли музыка тыңланым. Башҡорт телендә көндәлек алып барыуым да башҡортса уйлап өйрәнергә ныҡ ярҙам итте.*

***✓ Минең характерым формалашыуында милли асылым да ыңғай ролен уйнаны, тип иҫәпләйем. Бында башҡорт этнопедагогикаһының ыңғай йоғонтоһо хаҡында һүҙ алып барырға була.***

# БУЛМАҺА... йөрөр инем



Был мемориаль комплекс етди өйрәнеүҙе талап итә.

Әлшәй районының Ташлы ауылы янында Емеректау тигән урында бер нисә таш бар. Уның береһе "Килենташ" тип атала. Арыраҡ китһәң, унда бер нисә ташта руник яҙмаларға оҡшаш яҙмалар бар. Улар ямғыр, ел йоғонтоһонда юҡҡа сығып бара. Ауыл кешеләре һөйләүенсә, 90-сы йылдар башында унда Ҡытайҙан бер ғалимә килгән. Ул таштағы яҙыуҙы "Һинең өсөн ҡайғырабыҙ, бөйөк император" тип уҡып киткән, имеш. Был ҡомартҡы ла етди өйрәнеүҙе көтә. Башҡортостанда шундай урындар бик күп. Әгәр ҙә уларҙы һаҡламаһаҡ, өйрәнмәһәк, 20-25 йылдан һуң ул ҡомартҡылар юҡҡа сығыуы ла ихтимал.

## "Р" өнөнә мөнәсәбәтем

Мин 1989 йылда тыуғанмын, шуға күрә Ленин башы төшөрөлгән китап-дәреслектәрҙе лә яҡшы хәтерләйем. Октябрят булырға өлгөрмәһәм дә, балалар баҡсаһында беҙгә Ленин тураһында шиғырҙар һөйләткәйнеләр. Шиғыр һөйләүем ығы-зығылы ғына булып сыҡты. Ни өсөн тигәндә, мин атайымданмы-әсәйемдәнме Ленин тураһындағы бер сатирик шиғырҙы отоп алғайным. Уны тәрбиәселәргә лә һөйләп ишеттерҙем. Шиғырҙың бер куплеты шулай ине:

*Это что за большевик*
*Лезет там на броневик.*
*Кепку серую он носит,*
*Букву "р"не произносит...*

"Р" хәрефе менән минең дә Ленинд ыҡы кеүек ҡыйынлыҡтарым бар. Шуға күрә ул шиғыр Ленинға бағышланһа ла, үҙемә ҡарата ла сатирик булып сыҡты.

Тапшырыу әҙерләгәндә кадрҙар артындағы текстарҙы уҡығанда ҡолаҡҡа наушник кейеп ултыраһың бит инде. Шунда үҙ тауышымдың нисек яҙылыуын тыңлайым һәм "р" өнөмдөң нисек яңғырауына ла иғтибар итәм. Шуға күрә был өн күп булған һүҙҙәр менән көрәшергә тура килә. Әйткәндәй, башҡорт телендә "р"һыҙ һөйләшеүе бик ҡыйынға тура килә. Минең һаҡау "р" өнөм башҡорт телендәге "ғ" һәм "ҡ" өндәренә бик оҡшаш. Шуға күрә улар бер һүҙҙә осраған осраҡта уларҙы уҡыуы бик ҡыйын. Шуның өсөн мин "р" өнө булған һүҙҙәрҙе ҡулланмаҫҡа тырышам. Әйткәндәй, башҡортса һөйләшкәндә хатта "башҡорт" һүҙен дә әйтеүе бик ауыр бирелә.

Был йәһәттән режиссерҙарыма ла бик ҙур рәхмәт әйтергә кәрәк. Сөнки тапшырыуҙарымдың эстетикаһы күбеһенсә уларҙың хеҙмәтенән тора. Ә телдең эстетикаһы - үҙемдеке. Салауат Хәмиҙуллин менән сағыштырғанда, беҙҙең шундай айырмабыҙ бар: Салауат үҙ телмәрендә бик йыш фәнни һәм һирәк яңғыраған һүҙҙәрҙе, терминдарҙы ҡулланырға ярата. Унан ҡайһылыр яғым менән айырылып тороr өсөн уның кеүек үҙенсәлекле булмаһа ла, матур яңғыраһын өсөн ошондай эстетиканы һайланым да инде.

## Милли асыл хаҡында

Әгәр ҙә кешегә тәбиғәттән ниндәйҙер һәләт һалына икән, ул юҡҡа сыҡмайҙыр, тип уйлайым. Минеңсә, был һәләттәрҙең асылыуы кешенең ниндәй йүнәлештә барыуына бәйлелер. Минең характерым формалашыуында милли асылым да ыңғай ролен уйнаны, тип иҫәпләйем. Бында башҡорт этнопедагогикаһының ыңғай йоғонтоһо хаҡында һүҙ алып барырға була. Ни өсөн тигәндә, был педагогика бик гуманлы педагогика һәм ул кешенең иң яҡшы һыҙаттарын үҫтереүгә, унан ысын мәғәнәһендәге шәхес тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.

Миненсә, аҙ һанлы милләттең һәр ағзаһы иҫәпле һәм ҡәҙерле. Үҙеңдең милләтең эсендә йәшәүе иң уңайлыһы, унда һиңә йылыраҡ һәм ябайыраҡ. Милли асылдан башҡа формалашыу һәм талантыңды балҡытыу, бәлки, мөмкиндер ҙә, әммә үҙ милләтең менән бергә булыуың был ғәмәлде ябайлаштыра.

## Башҡорт ренессансы

Дингә мөнәсәбәтем ҡаршылыҡлы булһа ла, мин динде милли мәҙәниәтебеҙҙең мөһим өлөшө тип һанайым, мәсеткә йөрөргә, дини мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнергә тырышам. Диссертация темаһы ла дингә бәйле, сөнки Ғәли Соҡорой суфый шәйехе булған. Дин - ул беҙҙе берләштерә һәм ул беҙгә кәрәк. Әммә дингә килеү менән, күптәр һымаҡ, үҙ милләтеңдән китеү генә кәрәкмәй. Шуны әйтергә кәрәк: башҡорттар Ислам динен ҡабул иткәндән алып бер нисә быуат һуҙымында милли-дини мәҙәниәт формалашҡан. Ислам дине сиктәренән сыҡмайынса ғына башҡорт халҡына ғына хас дини ойошторо у ҙа булған. XVIII-XIX быуаттарҙа милли рухты һаҡлауҙа мәҙрәсәләр ҙур роль уйнаған. Нәҡ шунда шәриғәт ҡанундарына өйрәнәләр, туған телде, милли мәҙәниәтте, тарихты уҡыталар, ҡарауһыҙ ҡалған ҡарттарҙы, ғәриптәрҙе аҫырағандар. Ошо дини структура милләтте һаҡлауҙа бик ыңғай роль уйнаған. Вәлидиҙәр, Бабичтар милли хәрәкәт башына килгән ваҡытта үҙебеҙҙең милли ислам булған, уның эсендә замана ҡуйған һорауҙарға, талаптарға яуаптар ҙа табылған. Революциянан һуң билдәле сәбәптәр арҡаһында был милли-дини мәҙәниәт тулыһынса тиерлек юҡҡа сығарылған. Беҙгә бөгөн шул милли-дини мәҙәниәтте тергеҙеү фарыз. Бер яҡтан, беҙгә элекке табылған ҡиммәттәрҙе бөгөнгөгә еткереү, икенсе яҡтан, уларҙы заманыбыҙға яраҡлаштырыу кәрәк. Бөгөн беҙҙең халыҡ алдында бик күп һорауҙар тора. Тажетдин Ялсығолдың, Ғәли Соҡоройҙың, Ғәбдрәхим Утыҙ Имәниҙең, Ризаитдин Фәхретдиновтың, Зәйнулла Рәсүлевтың хеҙмәттәрендә был һорауҙарға XIX быуатта уҡ яуаптар табылған инде. Әйткәндәй, милләтебеҙ ошо яуаптарҙы табып, алға китә башланы. Юғиһә, беҙ был һорауҙарға яуапты үҙебеҙсә биреп, әрләшә, талаша инек. Шуға күрә беҙҙең милли-дини мираҫыбыҙ ошо яҡтан да өйрәнеүгә лайыҡ. Ул бөгөн дә файҙалы. Мәҫәлән, шул уҡ Ғәли Соҡорой "Мәдхе Ҡаҙан" тигән хеҙмәтендә милли буржуазия, уның милләт алдындағы яуаплылығы тураһында яҙа. Бында автор бай кешеләр менән белемле кешеләрҙең берлектә булып, милләтте тәрбиәләү зарурлығы тураһында әйтә.

Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, XX быуат башында бай һәм белемле кешеләр бер төптән булып, башҡорт ренессансын барлыҡҡа килтергән. Ысынлап та, 1775 йылғы күтәрелештән һуң 1917 йылға тиклем, әгәр ҙә 1812 йылғы Ватан һуғышын иҫәпкә алмағанда, халҡыбыҙ тынып ҡалған һымаҡ тойола. Был ваҡыт эсендә халҡыбыҙ һан яғынан юғалыуҙы тулыландырған, яңы шәхестәрҙе барлыҡҡа килтергән. Был - мәсьәләнең демографик яғы. Икенсе яҡтан, башҡорт милләте XIX быуатҡа урта быуат милләте булып инә лә, яңы XX быуатҡа, хәҙергесә әйткәндә, модернизация үткән милләт булып сыға. Әхмәтзәки Вәлиди яҙыуынса, мең йыл эсендә булмаған үҙгәрештәрҙе атаһы бер ғүмере эсендә башҡара. Мәғлүмәт технологияһының үҫеше, йәшәү шарттарының үҙгәреүе барыһы бергә тупланып, башҡорт ренессансын барлыҡҡа килтергән. Был процестың кульминация нөктәһе - ғәскәр төҙөү һәм Башҡорт автономияһын төҙөү. Был уның, бер яҡтан, иң юғары, икенсе яҡтан, иң фажиғәле нөктәһе лә. Сөнки милләтебеҙ автономияһы өсөн ҡот осҡос күп ҡорбандар бирергә тура килгән. Беҙ был юғалтыуҙарҙы һаман да тулыландырып бөтмәнек әле.

## Күк, ер беҙгә көстө үҙе бирә

Владимир Путиндың "Башҡортостанда бер тамсылағы кеүек бөтә Рәсәй сағыла" тигән һүҙҙәре һәр йәһәттән дөрөҫ. Беренсенән, беҙҙә төрлө сығышлы милләт вәкилдәре йәшәй, икенсенән, республика климат үҙенсәлеге яғынан да ҡаршылыҡлы. Нишләптер, беҙ һәр ваҡытта ла өйрәнеү объекты булып сығабыҙ кеүек. Мәҫәлән, Рәсәй башҡорт ихтилалдары өлгөһөнән сығып, Ҡаҙағстанда, Урта Азияла, Кавказ яғында үҙен икенсерәк итеп тота. Ҡыҫҡаһы, башҡорт ихтилалдары Рәсәйҙе көнсығыш халыҡтары менән нисек мөғәмәлә итергә өйрәтте. Әйткәндәй, XX быуат башындағы ваҡиғалар ҙа шул уҡ сценарий буйынса алып барылды.

Беҙ, бер яҡтан, азиат та түгелбеҙ, европалы ла түгелбеҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙ Европаның да, Азияның да иң алғы периферияһы булып торабыҙ. Беҙгә тәүгеләрҙән булып Азияла һәм Европала барған процестарҙы кисерергә тура килә. Әхмәтзәки Вәлиди әйтмешләй: "Беҙ аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа түгелбеҙ, башҡорттарбыҙ". Был һүҙҙәре өсөн ул һәйкәлгә лә, мәңгелек данға ла лайыҡ. Сөнки беҙҙә, айырым осраҡтар күҙәтелһә лә, башҡалар кеүек, атай - улға, ул- атайға, ағай ҡустыға ҡаршы бармаған. Ошо арҡала беҙҙең халыҡ, шундайын ҡаты һынау үткәндә лә, берҙәм булып ҡалды, тарҡалманы, аҡтарға, ҡыҙылдарға, байҙарға, ярлыларға бүленмәне. Был асылыбыҙ бөгөн дә һаҡланһа ине. Сөнки кешелек алдында ниндәй генә сәйәси ваҡиғалар, иҡтисади мәсьәләләр тыумаһын, беҙҙең өсөн төп бурыс - милли рухты һәм берҙәмлекте һаҡлау. Күлтегин атлы ғәскәр башлығының һәм дәүләт эшмәкәренең стелаһында: "Төрки халҡы тарҡалып юҡҡа сыға башлаған. Төрки Тәңреһе (йәғни күге), төрки изге ере-һыуы "Төрки халҡы юҡ булмаһын, бер ил булһын", тип әйткән", - тип яҙылған. Бынан шуны аңларға була: беҙ әгәр ҙә ошо күгебеҙгә ҡарап, ошо еребеҙҙә баҫып тороп ҡала алһаҡ, күк, ер беҙгә көстө үҙе бирәсәк.

***Беҙ, бер яҡтан, азиат та түгелбеҙ, европалы ла түгелбеҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙ Европаның да, Азияның да иң алғы периферияһы булып торабыҙ. Беҙгә тәүгеләрҙән булып Азияла һәм Европала барған процестарҙы кисерергә тура килә. Әхмәтзәки Вәлиди әйтмешләй: "Беҙ аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа түгелбеҙ, башҡорттарбыҙ". Был һүҙҙәре өсөн ул һәйкәлгә лә, мәңгелек данға ла лайыҡ. Сөнки беҙҙә, айырым осраҡтар күҙәтелһә лә, башҡалар кеүек, атай - улға, ул- атайға, ағай ҡустыға ҡаршы бармаған. Ошо арҡала беҙҙең халыҡ, шундайын ҡаты һынау үткәндә лә, берҙәм булып ҡалды, тарҡалманы, аҡтарға, ҡыҙылдарға, байҙарға, ярлыларға бүленмәне. Был асылыбыҙ бөгөн дә һаҡланһа ине.***

## Пландарым

Пландарыма килгәндә, "Белергә кәрәк" тигән тапшырыуҙарымды тағы ла бер йыл дауам итергә ниәтләнәм. Элегерәк был тапшырыуҙарға ҡарата фекерҙәрен тамашасылар интернетта ғына яҙа инеләр, әле ҡағыҙға яҙылған хаттар ҙа килә башланы. Алдағы миҙгелдән инде ниндәйҙер яңы һәм етдиерәк, ваҡыты буйынса оҙайлыраҡ проекттар башларға уйлайым.

Фотоға төшөрөргә, велосипедта йөрөргә ятатам. Әле китапхана туплайым. Китаптарҙы кәрәклеге һәм ҡыҙыҡлығы буйынса, ҡайһы саҡта матурлығы буйынса ла һайлайым. Эш буйынса ла бик күп китаптар уҡырға тура килә. Башҡорт, урыҫ телендәге нәфис әҙәбиәтте лә, ғилми әҙәбиәтте лә уҡып барырға тырышам. Заманса әҙәбиәтте лә күҙ уңынан ысҡындырмайым. Аспирантураға уҡырға ингәс, университетҡа студенттарға лекция уҡырға ла саҡырҙылар. Былтыр "Стилистика һәм әҙәби мөхәррирләү" курсын алып барҙым, быйылғы курсым "Уҡыу гәзитен сығарыу" тип атала.

Телевидение миңә танылыу килтерҙе, ниәттәремде ҡыҫҡараҡ ваҡыт эсендә бойомға ашырырға ярҙам итте. Коллегаларыма оло рәхмәтемле еткерәм. Әгәр ҙә донъяла телевидение булмаһа, бөгөн мин мәҙрәсәлә булыр инем.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Искәндәр һымаҡ бик иртә шәхес булып өлгөргән, шөғөлөндә ҙур уңышҡа өлгәшкән кешеләрҙе донъя кимәлендә вундеркинд тип атайҙар. "Һин үҙеңде вундеркинд тип иҫәпләйһеңме?" тигән һорауыма ул: "Юҡ, мин дә һеҙҙең кеүек ябай ғына кешемен, ә ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеүем тырышлығымдан килә",- тип яуап бирҙе. Уның яуабына өҫтәп, шуны ғына әйтке килә: был уңыштарға өлгәшеүҙә уға милли асылына тоғролоғо ла ярҙам итә бит. Ә был күптәр өсөн, йәғни аңлағандар, аңлылар өсөн бынамын тигән ишара.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
яҙып алды.**

✓ *Затлы йыһаздар менән тулы фатирҙа хәтеремә мәңгелеккә уйылып ҡалған мут күҙҙәр ҡаршы алды. Әлбиттә, үҙе олпатланған, ҡорһаҡ үҫтереп алған, шилмә, ләкин күҙҙәр бит һимермәй ҙә, үҙгәрмәй ҙә.*





Мәүлит Ямалетдин

# Ҡыҙылъяр

Новелла

-Әй, малайҙар! - тип ҡысҡырам. - Килегеҙ әле бында!

Тыңлаулы ғыналар икән - тауышты ишетеү менән кемуҙарҙан үрмәләп янға килеп тә еттеләр. Ҡарамаҡҡа 14-15 йәш тирәһендәләр. Береһе, буйға ҡалҡыуырағы, ҡаҡса кәүҙәле, икенсеһе тәпәшәгерәк, үҙе йыуантыҡ. Мин, мөмкин тиклем яғымлыраҡ булырға тырышып, сәләм бирәм:

- Һаумыһығыҙ әле, егеттәр!

Бер тауыштан тиерлек сәләм ҡайтарғас, буйға оҙонорағы, күҙҙәрен мут йылтыратып, һорай:

- Ни булды, апай? Нимәгә саҡырҙың?

- Һеҙгә бик ҙур үтенесем бар ине, - мин әйтәм.

Был юлы тегеләрҙең төпөшө һүҙ ҡыҫтыра:

- Һә... Йә, ниндәй йомош?

- Зинһар өсөн, өйөгөҙҙән бер-ике һыныҡ икмәк кенә алып килегеҙсе. Бик алыҫтан, Себер яғынан килеп ултырам. Ике көн ашағаным юҡ - хәлем бөттө...

Бер-береһенә мәғәнәле ҡарашып алғандан һуң, һонтор әйтә:

- Ниңә, була ул...

Унығ был һүҙҙәренән күңелем тула - тауышым ҡалтыранып сыға:

- Изгелегегеҙҙе ғүмерҙә лә онотмаҫ инем...

Әммә иртәрәк ҡыуанғанмын икән - һонторҙоң хәбәренең аҙағы быға асыҡ дәлил:

- Түлкә буштың атаһы күптән үлгән, тиҙәр бит әле.

- Бирерлек нәмәм юҡ шул, - тим. - Ҡайтып килгән ерем аҡса эшләй торған урын түгел.

- Ә кем һинән аҡса һорай? - ти баяғы мут күҙ. - Күрһәтһәң, беҙгә шул еткән.

Мин ҡапылғара һүҙҙең айышына төшөнмәйем, шуға күрә:

- Нисек? - тип һорайым.

Һонтор, төшөнмәһәң, төшөн, тигәндәй, тура яра:

- Нисек булһын? Сисеп инде...

Ах, маңҡалар!.. Ах, оятһыҙҙар!.. Ҡара һин уларҙы, әле үк баштан уйҙарында нимә! Тәүге уйым - тегеләрҙең тетмәкәйҙәрен тетеү, эт тиреләрен баштарына ҡаплап әрләү ине. Тик ул саҡта икмәкте онотorға тура киләсәк. Туҡта, имандарын уҡытайым мин быларҙың! Асыу менән ғәрлекте төпкәрәк йәшереп:

- Ярар, риза. Бар, алып килегеҙ икмәгегеҙҙе, - тип әйтергә үҙемде мәжбүр иттем.

Малайҙарҙың ниндәй тиҙлек менән ауылдары яғына йүгергәнен күрһәгеҙ ине! Аяҡтарына күҙ эйәрмәй хатта. Тыйылғанды күреү теләге шул дәрәжәлә көслө микән ни? Уларҙың йән-фарман елеүҙәрен ҡарап ултырыу ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та ине. Күрмәгәндең күргеһе килә, күргәндең ҡоҫҡоһо килә, тигәндәре шулдыр инде...

Ошоларҙы уйлап та өлгөрмәнем - һәүректәрем анталашып килеп тә етте. Һонторҙоң ҡулында - икмәктең дүрттән бер өлөшө. Уны күргәс, минең ауыҙҙан һыуҙар ҡойолоп китте. Тамшаныуымды белдермәҫкә тырышып:

- Икмәкте бынау таш өҫтөнә һалып тороғоҙ, - тигән булам. - Үҙегеҙ артығыҙ менән әйләнегеҙ, ыштанды сискәс, белгертермен - шунан боролоп ҡарарһығыҙ.

Үҫмерҙәрҙең мин әйткәнде үтәүе булды - йүгереп барҙым да икеһен дә яр аҫтына сөрсөтә төрттөм. Ул көс менән сәмде ҡайҙан алғанмындыр инде. Ләкин ҡыҙған саҡта уны-быны тикшереү ҡайғыһы юҡ - шул ыңғайҙан таш өҫтөндәге икмәкте эләктереп ала һалып, ҡайтыу яғына һыпырттым.

* * *

Ошо ваҡиғанан һуң утыҙ йыл үткәс, теге мут күҙ менән ҡабаттан осрашырбыҙ, тип кем уйлаһын? Осрашыуҙың да ниндәйе әле! Ысынлап та, урыҫ әйтмешләй, Ер түңәрәк, ә донъя йөҙө тар, ахырыһы.

Теге ваҡытта анау үҫмерҙәрҙән талап тигәндәй алған икмәктең ҡеүәте менән тыуған ауылыма ҡайтып ауҙым мин. Ауҙым, тигәс тә, аҫтыңа түшәк, башыңа яҫтыҡ әҙерләп тороусы кеше ҡалмаған тиерлек - атайымдың ике ҡустыһы ла һуғыштан ҡайтмаған. Дөрөҫ, өйләнеп өлгөргәненең ҡатыны ҡалған, ләкин ағайың иҫән булмаһа, еңгәй - кеше балаһы. Хәйер, уны ла аңларға була: береһенән-береһе ваҡ ике бала менән осон-осҡа саҡ ялғап йәшәй. Өҫтәүенә, колхоз эшенә ҡыуып йонсоталар.

"Былай булмай", тип уйланым да, бер аҙ баш-күҙ алғас, Өфөгә юлландым. Ни тиһәң дә, өйрәнгән ер. Баш ҡалала эшкә урынлашыу, шәхес булараҡ үҫеү өсөн дә мөмкинселектәр сағыштырғыһыҙ ҙур. Уйым асылда дөрөҫ булһа ла, бер нәмәне иҫәпкә алмағанмын икән - халыҡ дошманы мөһөрө. Ә уның менән гәзит-журнал тирәһенә яҡын да юларлыҡ түгел. Ҡыйынлыҡҡа өйрәнгән баш, тинем дә, асылыуына бер йыл ғына тулған моторҙар эшләү заводы идаралығына йыйыштырыусы булып эшкә урынлаштым. Черниковка биҫтәһендәге эшселәр ятағынан урын бирҙеләр, тормошом яйлап көйләнеү яғына китте.

Заводта өс йыл эшләгәс, шунда слесарь булып хеҙмәт иткән Ғәбиткә кейәүгә сыҡтым. Был ваҡытта мин бухгалтерҙар курсын тамамлап, завод идаралығының иҫәп-хисап бухгалтерияһында эшләп йөрөй инем. Бер йылдан улыбыҙ тыуҙы. Атаһыныҡына оҡшаш итеп, уға Сәғит тип исем ҡуштыҡ. Минең күңел үҫә төштө. Ә бит быға тиклем, биҙәү ҡатынмын тип, үҙ-үҙемә ҡул һелтәгәйнем. Тимәк, тәүге никахтан бала булмауҙа мин ғәйепле түгел. Күрәһең, Нурислам мәрхүм түлһеҙ булған.

Бер мең туғыҙ йөҙ илле алтынсы йыл миңә һөйөнөс тә, көйөнөс тә алып килде. Һөйөнөсө шул: мине аҡланылар, йәғни хәҙер халыҡ дошманы түгелмен. Ләкин был аҡлауҙан ни файҙа: миллиондарса кеше бер ғәйепһеҙгә атылған, иҫән ҡалғандарының яҙмыштары ҡыйралған. Ҡалай рәхәт - бер үк кешенән бөгөн дошман, иртәгәһенә дуҫ яһайһың. Бына һиңә атайҙар ғүмерҙәрен ҡорбан итеп яулаған яңы тормош!

Был йылдың көйөнөсөнә килгәндә, Ғәбит ҡапыл фажиғәле рәүештә вафат булып ҡалды. Төнгә ҡаршы тәмәкеһе бөткәйне, шуны алырға магазинға китеп барғанда үлтереп киттеләр. Ул йылдарҙа Черниковка бандиттар ояһы ине бит. Шулай итеп, алты йәшлек Сәғитемде ҡосаҡлап, тағы ла ирһеҙ ултырып ҡалдым. Күрәһең, миңә ир бәхетен тулыһынса татыу яҙмаған.

Бер-береһенә ялғанып йылдар үтте, йылдар менән ярышып улым үҫте. Ҡайһы бер көндәрҙә таң менән эңер араһы мәңгелектәй тойолһа ла, тулайым алғанда ғүмерҙең иҫ киткес йылдам үтеүенә ғәжәп итерлек. Быны мин Сәғиткә ҡарап әйтәм: әле генә беренсе класҡа барам тип ҡыуанып йөрөгән баланың унынсыны тамамлағаны һиҙелмәй ҙә ҡалды. Унан һуң Өфө нефть институты. Быныһы бигерәк тиҙ үткәндәй тойолдо: яңы ғына унда керергә имтихандар биреп йөрөй ине, бөгөн иһә дипломлы белгес. Өфө нефть эшкәртеү заводында эш башлауына ла өс йыл булып китте.

Ә минең, киреһенсә, пенсияға сығыуыма өс йыл. Хеҙмәт кенәгәмдә бер генә яҙыу: Өфө моторҙар эшләү заводы. Унда оҙаҡ йылдар бухгалтер булып хеҙмәт иттем. Һуңғы ун йылда баш бухгалтер урынбаҫары вазифаһын башҡарҙым. Дөйөм алғанда, тормошомдан ҡәнәғәтмен. Ҡәнәғәт түгелмен, тип тә ҡайҙа бараһың - ҡалай булһа ла ғүмер уҙған, сабата туҙған.

Хоҙайҙың икһеҙ-сикһеҙ хикмәттәренең береһелер инде - мең туғыҙ йөҙ етмеш бишенсе йылда Сәғит, ниһайәт, бер ҡыҙ менән танышып, осраша башланы. Исеме Вәлимә, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында дүртенсе курста уҡып йөрөй. Тап килһә килә бит - ҡыҙыҡайҙың тыумышы минең райондан булып сыҡты. Былай үҙе төҫкә-башҡа арыу ғына, холҡо ла һәйбәт күренә. Минең өсөн был һөйөнөс кенә, сөнки быға тиклем Сәғиткә ғаилә ҡороу хаҡында бер нисә мәртәбә ишаралап ҡараһам да, ул йә быны шаярыуға бора, йә булмаһа буш вәғәҙә менән күңелемде йыуата ине. Һиҙәм: Вәлимә уға оҡшай, аралары көндән-көн яҡыная бара. Тимәк, ошо мөләйем, итәғәтле ҡыҙ сүрәтендә минең улыма ла мөхәббәт килә, бәхет йылмая. Эй, Хоҙайым, шулай ғына була күрһен инде!

Дуҫлашыуҙарына бер йыл үткәс, өйләнешеү тураһында һүҙ ҡуҙғатырға булдым. Ысын, ниңә һуҙырға уны - иртәме, һуңмы, эш барыбер шуға килеп төртөләсәк бит. Сәғиттең йәше үтеп бара, ҡыҙ бына-бына ҡулына диплом аласаҡ. Ошонан да уңайлы мәлдең булыуы мөмкин түгел. Улымдың тел төбөнән аңлауымса, йәштәр ғаилә ҡороуға һис ҡаршы түгел, тик Вәлимә атаһының асыуын ҡабартыуҙан ҡурҡа, имеш.

- Ниңә улай? - тип һорайым мин. - Ҡыҙ бала ата йортонда мәңге тора алмай инде.

- Эш унда түгел, - ти Сәғит. - Буласаҡ ҡоҙаң бит үҙҙәрендә райкомдың икенсе секретары булып эшләй. Вәлимә беҙҙең ниәтте әсәһе аша әйттереп ҡараған икән, тегеһе туҙынған да киткән. Йәнәһе, бөтә ерҙә былтырғы ҡоролоҡ эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса көрәш барғанда, кейәү ҡайғыһымы? Вәлимәнең әсәһенә ныҡ ҡына эләккән, шуға ла был турала ҡабаттан һүҙ ҡуҙғатырға шикләнәләр икән.

Ярһыным да киттем. Эй, илаһым, тағы ла шул партия! Кеше яҙмыштары менән уйнарға кем хоҡуҡ биргән уға? Беҙҙең быуын кешеләренең тормошон зил-зибәр килтереү етмәгән!

- Ҡурҡмағыҙ! - мин әйтәм. - Үҙем һөйләшермен. Вәлимә менән кәңәшләшегеҙ ҙә, өсәүләшеп юлға сығабыҙ. Тик һуҙмағыҙ. Мин ниндәйерәк һүҙҙәр табырға белермен.

Йәштәр ни, ҡыуанды ла китте. Кәйефтәре күтәрелеп, ҡиәфәттәре үҙгәреп ҡалды. Ҡыуаныстан ҡайҙа баҫҡандарын белмәй йөрөгән булалар, балаҡайҙар. Шулай итеп, бер-ике көн эсендә тиҙ-тиләмә генә йыйындыҡ та, юлға сыҡтыҡ.

Әммә миңә бер ниндәй ҙә махсус һүҙҙәр эҙләп ыҙаларға тура килмәне, сөнки ҡоҙа була торған кеше таныш булып сыҡты. Таныштың да ниндәйе әле: беҙҙе район үҙәгендәге затлы йыһаздар менән тулы фатирҙа хәтеремә мәңгелеккә уйылып ҡалған мут күҙҙәр ҡаршы алды. Әлбиттә, үҙе олпатланған, ҡорһаҡ үҫтереп алған, шилмә, ләкин күҙҙәр бит һимермәй ҙә, үҙгәрмәй ҙә. Хужаны күргәс тә, йөрәгем жыулап ҡуйҙы, иҫемә "ҡылт" итеп Ҡыҙылъярҙағы теге ваҡиға килеп төштө. Ләкин сер биреү ҡайҙа!

Күрешеү, хәл-әхүәл белешеү шау-шыуынан һуң, йәштәр айырым бүлмәгә инеп йәшенде - тартыныу ғәләмәте инде. Хужабикә ни биреп, ни ҡуйырын белмәй өтәләнеп, кухняға сығып китте. Иренән бер әрләнгәс, бәләһенән баш-аяҡ, тиҙер, моғайын. Иркен залда ҡоҙа булаһы кеше менән икәүҙән-икәү генә ҡалдыҡ. Мин, мәҙехләп тормайынса, урыҫ әйтмешләй, үгеҙҙе шунда уҡ мөгөҙөнән алдым:

- Ҡоҙа, мин тағы ла һоранырға килеп ултырам әле.

Хужа дорфа ғына яуап бирә:

- Во-первых, мин ниндәй ҡоҙа булайым? Во-вторых, һеҙҙе тәүгә күрәм. - Әллә ысынлап танымай, әллә танымағанға һалыша был.

- Дә-ә, - тип һуҙам мин, - осрашмағанға утыҙ йыл. Байтаҡ ваҡыт шул...

Теге миңә "ялп" итеп ҡарап ала. Уның һынсыл күҙ ҡарашы, бигерәк тә бынау һорауы ниҙер һиҙенгәнгә оҡшай:

- Туҡта, һеҙ ҡайһы яҡтан һуң?

- Ошо райондан, - мин әйтәм. - Ҡырҡ етенсе йылда Себерҙән ҡайтышлай ауылығыҙҙан үтеп киткәйнем. Ҡыҙылъяр үҙгәргәндер инде?

Минең был һүҙҙәр уға тетрәткес тәьҫир итә: битенә тимгел-тимгел ҡыҙыллыҡ сыға, үҙенең өрәйе шиңеп, нисектер кесерәйеп ҡалғандай тойола. Һүҙенең дә рәте-сираты юҡ:

- Ауыл ни... как ауыл инде, - тип мығырҙай. Ҡайҙа булды баяғы тәкәбберлек менән һауалы төҫ?

"Ә-ә, таныныңмы, шайтан? - тип уйлайым эске бер ҡәнәғәтләнеү һәм аңлашылмаған кинәнес менән. - Әҙерәк йәнеңде үртәп алайым әле".

- Теге ярығыҙ һаман шулай текәме әле?

Минең был һорауым һауала аҫылынып ҡала, сөнки залға бер ҡосаҡ һауыт-һаба күтәргән хужабикә килеп инә. Ул үҙе алсаҡ, тауышы яғымлы:

- Юлда асыҡтығыҙ инде! Хәҙер аш өлгөрә. Вәлимә, сыҡ әле бында! - Ул иренә өндәшә: - Бар, әйт әле, ярҙамлашһын.

Хужа, уңайһыҙ һорауға яуап биреүҙән ҡотолғанына ҡыуанған төҫлө, тамағын ҡыра-ҡыра йәштәр бүлмәһенә ыңғайлай.

**(Дауамы бар).**

*ЮЛДАР САЙТЫНДА*

**Ошоға тиклем уның бер генә гәзит-журналға ла, радио-телевидениеға ла интервью биргәне булманы. Юҡ, ул "дүртенсе власть" вәкилдәренән алыҫыраҡ торорға тырыша, улар өсөн күңел ишектәрен дә, эш бүлмәһе ишектәрен дә ябып, "ныҡлы оборона" тота тип уйлап ҡуймағыҙ. Бары тик ул да ошо уҡ даирә кешеһе һәм бар донъяны оператив мәғлүмәт менән тәьмин итеүсе, арабыҙҙағы яҡшы, өлгө булырлыҡ геройҙар менән таныштырыусы, фәһем, һабаҡ алырҙай тапшырыуҙар әҙерләүсе журналистарҙың үҙҙәренең "кадр" артында ҡалыуы - ғәҙәти күренеш. Ә шулай ҙа беҙ бар тәбиғәт алтынға мансылған миҙгелдең бер көнөндә алтын юбилейын билдәләүенән файҙаланып, уның эш бүлмәһенең ишеген шаҡырға батырсылыҡ иттек. "Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһы"ның Башҡортостандағы филиалы директоры Рәмис Рәжәп улы ДӘҮЛӘТБАЕВ эш бүлмәһенең генә түгел, күңел ишеген дә ихлас асты.**



# ЯҘМЫШЫНА ЯҘҒАНЫ...

## телевидение

### Татлы тормош

Советтар осоронда мәктәпте тамамлау менән уҡ юғары уҡыу йортона инеү мөмкин түгел ине - мотлаҡ бер йыл булһа ла эш стажың булырға тейеш. Шуға ла Рәмис Рәжәп улының хеҙмәт кенәгәһе "татлы тормош"тан - Мәләүез шәкәр заводынан башлана. Тик күп тә үтмәй, уны хәрби хеҙмәткә саҡыралар. "Татлы тормош" шуның менән тамамлана икән тиһәгеҙ, ныҡ хаталанаһығыҙ. Ҡәҙерен белгәндәргә, аңлағандарға, һау-сәләмәт булып, Тыуған ил алдындағы бурысын лайыҡлы башҡарыуҙан да татлы мәл бармы икән? Эйе, кем өсөндөр армия - һынау мәктәбе. Унда рухы ныҡтар һынмай, киреһенсә, быуындарын нығытып, яуаплылыҡҡа өйрәнеп ҡайта. Хәйер, беҙҙең герой өсөн был сифаттар бала саҡтан уҡ ят түгел. Мәктәп йылдарында комсомол комитеты секретары булған Рәмис әрме хеҙмәтендә лә ошо бурысты намыҫлы башҡара. Бөгөләр үҙ "тиреһен" генә ҡайғыртҡанда, ул барлыҡ хеҙмәттәштәре өсөн яуаплылыҡ тоя. Бәлки, етәкселек орлоҡтары уға шул ваҡытта уҡ һалынғандыр ҙа. Сөнки хәрби хеҙмәттән ҡайтып, Башҡорт дәүләт университетында, һуңынан БАССР-ҙың Министрҙар кабинеты йүнәлтмәһе буйынса белем алыуын М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетында дауам иткәндә лә ул студсовет рәйесе, комсорг, студенттар отряды комиссары, командиры вазифаларын башҡара.

Тыуған Башҡортостандан алыҫта, илебеҙҙең йөрәге булған Мәскәүҙә уҡыу, армиянан һуң ҡабат таныш та, ҡәҙерле лә булған мөхиттән айырылыу уның күңелендә Тыуған ил, халыҡ, милләт төшөнсәләренең асылын тағы ла нығыраҡ аңларға ярҙам итә. Бәлки, тап ошо тойғо "Азатлыҡ" радиостанцияһына эшкә саҡырыуҙарына ҡарамаҫтан, Өфөгә ҡайтыуына булышлыҡ иткәндер ҙә. Баш ҡалала ла егетте ян-яҡҡа тартҡылауҙар башлана (егеттәр араһында журналист кадрҙарына бөгөн дә һорау ҙур шул). Дәүләт телерадиокомпанияһы уны үҙенә алырға тырыша, "Башҡортостан" гәзите мөхәррире үҙенә "ҡоҙалай". Бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡараһаҡ, башҡа урында эшләһә, ул ошо тиклем эштәрҙе атҡара алыр инеме икән, тигән фекергә килләһең. Сөнки...

### "Тура эфир"ҙа...

... һеҙҙе Рәмис Дәүләтбаев менән Луиза Фархшатова сәләмләй". Үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫеп, демократия, асыҡлыҡ, тигән һүҙҙәр йыш ишетелә башлағас та, ул ваҡытта БАССР-ҙың телевидение һәм радиотапшырыуҙары хәбәрсеһе (һуңынан - баш мөхәррире) булып эшләгән Рәмис Рәжәп улы коллегаһы менән бергәләп ойошма тарихында беренсе тапҡыр "тура эфир"ға сыға. Һуңынан был тапшырыу даимиға әйләнә, айлап ҡына уға "Йәкшәмбе студияһы" өҫтәлә һәм радио тыңлаусыларҙың яратҡан тапшырыуына әүерелә. Сөнки унда иң төүгеләрҙән булып суверенитет, Президент статусы тураһында һүҙ күтәрелә һәм сығыштан-сығышҡа ул үткерерәк яңғырай башлай. Әлбиттә, таяҡтың ауыр башы төшкән осраҡтар ҙа була, ләкин тапшырыуҙар үҙ эшен эшләп - халыҡ аңын уятып, уға йоғонто яһап өлгөрә.

Ғөмүмән, Рәмис Рәжәп улы бөгөнгө "директор" ҡәнәфиенә ултырғанға тиклем барлыҡ баҫҡыстарҙы ла үтә. "Даирә" ижад берекмәһе асылғас, уның етәксеһе була, генераль директор урынбаҫары булып эшләй. Шуға ла ул үҙенең хеҙмәткәрҙәренә талапсан да. "Телевидениела эшләүсе журналист тәүҙә гәзит-журналда эшләп, грамматиканы, стилистиканы, һөйләм төҙөлөшөн ныҡлап үҙләштерергә тейеш. Икенсе баҫҡыс булып радиола эшләү тора. Гәзиттә эшләү матур текст төҙөү оҫталығына өйрәтһә, радиола кеше дикцияһы өҫтөндә эшләй, ауыҙ эсенән бутҡа бешермәй, ә асыҡ, аңлайышлы итеп һөйләргә, баҫымдарҙы дөрөҫ ҡуйырға өйрәнә. Шунан һуң ғына телевидениеға эшкә килеү мөмкин. Шул баҫҡыстарҙы үтмәйенсә, ысын тележурналист булыу мөмкин түгел", - ти ул.

### Муйын булһа, ҡамыт табыла...

Рәмис Рәжәп улын "Башҡортостан" дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһының генераль директоры итеп тәғәйенләгәс, ул үҙен ысын хужа итеп күрһәтә. "Азатлыҡ" радиоһына хеҙмәттәшлек итергә саҡырған йылдарҙа был редакцияның ниндәй шарттарҙа эшләгәнен күреп ҡайтҡан ир-азамат хәҙер инде ошо шарттарҙы нисек тә булһа үҙ коллективында булдырыу ниәте менән яна. Тап ошо йылдарҙа Башҡортостан юлдаш телеканалын республиканың барлыҡ райондары, республикаға сиктәш ятҡан өлкәләр ҡарай алһын өсөн ысын мәғәнәһендә көрәш башлана. Башҡортостандың тәүге Президенты Мортаза Рәхимов мәсьәләне ыңғай хәл итергә бойороҡ бирһә лә, башҡарма ведомстволар, бюджетта был сығымдар статьяһы һалынмаған, тигән һылтау менән тәҡдимде даими рәүештә кире ҡаға. Шул ваҡытта һәр район үҙ территорияһында сигналдарҙы тапшырыусы "ретрансляторҙар" ултыртып, ярҙамға килә. "Бөгөн Башҡортостан юлдаш телеканалы эфирға сыға икән - быны менән ул республиканың һәр районына бурыслы. Шуға ла районда турала күберәк сюжеттар, тапшырыуҙар әҙерләү даими булырға тейеш", - ти БЮТ каналының экс-етәксеһе.

Ҡабат Рәмис Рәжәп улының "Башҡортостан" ДТРК-һына етәкселек иткән йылдарына урап ҡайтһаҡ, бер йылдан һуң матди-техник база тулыһынса тиерлек үҙгәреш кисерә һәм нығытыла. Һәр журналисҡа персональ компьютер алына, һәр кем үҙенең тапшырыуын үҙ аллы монтажлай һәм яҙа башлай. Хатта башҡа өлкәләрҙән тәжрибә өйрәнергә килгән коллегалары был ниндәй үҙгәрештәрҙе күреп һоҡлана.

Шул йылдарҙа Рәмис Рәжәп улы үҙен яҡшы менеджер итеп күрһәтә лә инде. БЮТ баҙар шарттарына яраҡлаша, үҙ продукцияһын сығара башлай. БТВ-медиа сығарған дискылар, видеояҙмалар, клиптар сифаты менән дә, продукцияға мохтажлыҡ ҙур булыу яғынан да үҙен аҡлай. Сөнки: "Матур, сифатлы итеп төшөрөлгән клип - башҡорт балы, ҡымыҙ, ҡурай кеүек үк, милләттең йөҙөн билдәләүсе продукция", - тип, халыҡҡа тәҡдим иткән тауарының ниндәй булырға тейешлеген, уның кимәлен билдәләп, шарт ҡуя етәксе. Күрше өлкәләрҙә, Рәсәй Федерацияһының төрлө төбәктәрендә йәшәгән милләттәштәребеҙ генә түгел, республикала йәшәгән башҡорттар ҙа уларҙы ҡыуанып ала, оло бүләк итеп ҡабул итә. Тап ошо йылдарҙа телевидениела яңы студиялар асыла, ярты быуаттан ашыу элек төҙөлгән һәм бары тик косметик ремонт ҡына күргән биналар тулыһынса икенсе йөҙлеген кисерә. БЮТ журналистары Рәсәй территорияһы менән генә сикләнеп ҡалмай, сит илдәргә сығып, төрлө тапшырыуҙар әҙерләй, төрлө акциялар уҙғара...

### Өйрәнгән ат... менгегә яҡшы

Башҡорт халҡында шундай аҡыллы әйтем бар. Сөнки өйрәнгән атты теләһә ҡайһы ваҡытта тотоп менергә, кәрәк саҡта егеп сығырға була. Ул бер ваҡытта ла ҡанына һеңгән ғәҙәтен онотмаясаҡ. Ә инде байҙар араһында шундай ырым йәшәй: бай кешенең барлыҡ мөлкәте бер минут эсендә юҡҡа сыҡһа ла, ул бер йыл эсендә ҡабат үҙенә мөлкәт, байлыҡ туплаясаҡ. Сөнки ул бер тапҡыр ошо юлды үткән һәм ҡасан, ниндәй ғәмәлдәр башҡарырға кәрәклеген аныҡ белә. Ни өсөн ошо ике сағыштырыуҙы килтерәм? Һыу болғанмай тормағандай, тормош дарьяһы ла төрлөсә тулҡынланып ала. БЮТ каналы - Башҡортостандыҡына, Рәмис Дәүләтбаев командаһы "федералдарға" бүленгәс, бөгөнгө көн геройына тағы ла хужасыл булырға тура килә. Әйтергә кәрәк, был вазифаны ла ул уңышлы алып бара. Шул уҡ ваҡытта ижади коллективтың эше лә уның күҙ уңынан ысҡынмай. Кәрәк икән - ҡаты һөйләшә, ҡайһылыр урында маҡтап-хуплап та ебәрә, ғөмүмән, коллектив етәксенән уңған, тип ныҡлы ышаныс менән әйтергә мөмкин. "Төрлө кеше бар, берәүҙәрҙең холҡо насар булып та, профессиональ кимәле юғары булыуы мөмкин, икенсеһе бар эште лә еренә еткереп башҡара, өсөнсөһө тағы ла ниндәйҙер сифатҡа эйә. Команда булып, бер үк эш, бер үк бурыс - халыҡҡа хеҙмәт итеү бурысын башҡарғас, "минең генә фекерем хаҡ", тип ултырып булмай. Һәр фекерҙе ихтирам итәм, уртаҡ һығымтаға килергә тырышам", - ти үҙенең етәкселек серҙәре менән бүлешеп Рәмис Рәжәп улы. Ысынлап та, "Башҡортостан" ДТРК-һында етәкселек иткән йылдарында телерадиокомпания бик күп күрһәткестәр буйынса Рәсәйҙә тәүгеләрҙән береһе булып танылға. Рәмис Рәжәп улы компанияның технологик эшмәкәрлегендә һәр звеноның эш нескәлектәрен яҡшы белә, кеше ресурстарын һөҙөмтәле ҡуллана, телевидениела һәм радиола яңы проекттарҙы әҙерләп сығарыуға шәхсән ҡатнаша һәм уларҙың артабанғы яҙмышы менән ҡыҙыҡһынып тора. Ә бит телевидениела йәки радиола яңы канал, яңы тапшырыу асыу өсөн уларҙың һәр ҡайһыһына лицензия юллап алырға кәрәк була. Былар ҙың барыһы ла - етәксенең тынғыһыҙ хеҙмәт күрһәткесенең бер өлөшө генә...

### "Яңыртабыҙ, иҫкене һаҡлайбыҙ..."

Бөгөн Башҡортостан "федералдары" Рәсәй субъекттары араһында иң көслө унау иҫәбендә. 2015 йылда яңы цифрлы телевидение форматына күсергә планлаштыралар. Әле 4 каналда - Рәсәй1, Рәсәй2, Рәсәй-Башҡортостан, Рәсәй - мәҙәниәт, тиҙҙән тағы Рәсәй24 каналында эфирға сығырға йыйыналар. Ә инде мультиплексҡа күскәс, тәүлек әйләнәһенә эфирҙа буласаҡтар. Шартлы рәүештә "федераль" телевидение тип атаһаҡ та, директорҙың тел төбөнән аңлашылыуынса, улар Башҡортостан, башҡорт тамашасыһының ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өҫтөндә эшләй. Быны үҙәк ГТРК аҙна һайын үткәргән мониторинг һөҙөмтәләре лә раҫлай. Мәҫәлән, ГТРК ҡарамағындағы каналдарҙың өлөшө араһында беҙҙең "федерал"дар иң алда бара - уларҙы аҙна дауамында башҡа телевидение каналдары менән сағыштырғанда күберәк кеше ҡарай һәм был күрһәткес 18,3 процент тәшкил итә (сағыштырыу өсөн: Беренсе канал - 13,2, НТВ - 9,4, БЮТ - 2,1). Шундай уҡ анализ эш көндәре буйынса ла яһалған. Мәҫәлән, эш аҙнаһында Рәсәй-1 каналындағы Башҡортостан тапшырыуҙарын ҡараусылар өлөшө 19,7 процент булһа, беренсе каналға - 14,4, НТВ-ға -8,1, БЮТ-ға 2,1 процент тура килә. Шәмбе көндәрендә лә, эш аҙнаһының иртәнге сәғәттәрендә лә "Рәсәй-Башҡортостан" тапшырыуҙарының күрһәткестәре иң юғарыһы.

"Телевидениены яңыртабыҙ, ләкин иҫкене һаҡлайбыҙ, - тип Рәмис Рәжәп улы. - Быны тура мәғәнәлә аңларға ярамай. Мәҫәлән, радио йәки ТВ тапшырыуҙарындағы ҡайһы бер заставкаларҙы үҙгәртмәйбеҙ. Сөнки Наилә Ғәләүетдинованың сәләмләүе - ул Башҡортостан халҡы тарафынан үҙенә күрә бренд кеүек ҡабул ителә. Әлбиттә, шундай тауышлы дикторҙар, алып барыусыларҙы эҙләйбеҙ, әммә бренд кимәленә күтәрелгән тауыштар яҙылған заставкаларға теймәйбеҙ. Яңыртыу - матди-техник базаға, яңы тапшырыуҙар, яңы проекттарға ҡағыла".

Яңыртыу тигәндән, һәр яңылыҡ - ул онотолған иҫке нәмә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәрҙер. Даими алып барылған "Урал менән Волга араһында" тигән ҙур радиопроектҡа Өфөгә килергә сират еткән икән. Һәм, ниһайәт, 28-29 сентябрҙә уны "Бөтә Рәсәй ДТРК-һы"ның Башҡортостан филиалы ҡабул итәсәк. Был көндә ҙур кәнәшмә үтәсәк. Уның тыңлаусылар өсөн дә, ойошма хеҙмәткәрҙәре өсөн дә яңы һулыш алып килеүенә шик юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ә Рәмис Дәүләтбаевтың ғаиләһе хаҡында нимә бер һүҙ ҙә юҡ, тип аптырар күптәр. Материалды яҙғандан һуң уҡып сыҡҡас, мин дә үҙемә ошо һорауҙы бирҙем. Хәйер, етәксегә ниндәй генә һорау бирмә, уның яуаптары барыбер телевидениеға, уның пландарына, коллективына барып бәйләнә. Сөнки коллективы уның өсөн ҙур бер ғаиләгә әүерелгән, телевидение - яҙмышына яҙған өлөшө, пландары - халҡы, милләте алдындағы бурысын үтәүҙән дауамы. Әгәр "тыл"ы ныҡ булмаһа, Рәмис Рәжәп улы нисәмә йылдар яуаплы эштәр башҡара, яуаплы вазифа биләп, Башҡортостан етәкселеге алдында ғына түгел, Рәсәй етәкселеге алдында ла абруй ҡаҙана алыр, икенсе дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены миҙалына лайыҡ булыр инеме икән? Юҡтыр, ахыры. Шуға ла ғаиләһе хаҡында һүҙ булмаһа ла, һәр һөйләм, һәр ҡаҙаныш артында ошо ныҡлы "көлгәтыл"дың һулышы тойолғанын зирәк уҡыусы ла, ғаиләһе лә аңлар, моғайын...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# СТРЕСҠА ҠАРШЫ ТОРОУ...

## гендарға бәйле, имеш

■ Бехтерев исемендәге Кеше мейеһе институтының неврология үҙәге хеҙмәткәрҙәре йылы көндәр менән хушлашыуҙы һәм һыуыҡтар төшөүен нисек ҡабул итергә өйрәтә? Үҙәктең етәксеһе, профессор Леонид Чутко иҫкәртеүе буйынса, көҙ миҙгеле - ул нервы-психик төшөнкөлөк осоро ла. Кешеләр был ваҡытта бушҡа ғына көйәләнеп китеүе ихтимал. "Әгәр ҙә һеҙгә йәмәғәт транспортында, магазинда юҡҡа ғына ҡысҡыралар, йәки төртөп ебәрәләр икән, быға иғтибар итмәҫкә тырышығыҙ, - ти психологтар. - Һеҙҙе рәнйеткән ваҡиғаны тиҙерәк онотоу өсөн уйҙа ғына ҡулығыҙҙы йылы һыуға тығығыҙ". Бынан тыш, үҙеңде ҡулда тотоу өсөн башҡа ысулдар ҙа бар, ти Леонид Чутко: "Өс F ҡағиҙәһе бар. Ул ризыҡ (food) - ваҡытында туҡланырға, үҙеңә оҡшаған ризыҡты йышыраҡ ашарға. Икенсеһе - хәрәкәт (feed) - физкультура менән шөғөлләнеү, бассейнға, спортзалға йөрөү. Өсөнсөһө - алыш (fight), йәғни, сағыу эмоциялар. Тормошта нимәгәлер өлгәшеү, нимәнәлер еңеү өсөн маҡсат гел кәрәк".

■ Ҡыйынлыҡтарға ҡаршы көрәшә белеү, уларға бирешеп бармау гендарҙан килә, ти Нотр-Дам университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре. Донъяны ҡабул итеү үҙенсәлеге һәм психофизик конституцияһының ниндәй булыуына ҡарап, кеше стрестарға йә бөтөнләй бирешмәй, йә, киреһенсә, ауыр үткәрә. Быны шуның өсөн дә эш урынында ла бер үк ваҡиғаны төрлө кеше төрлөсә ҡабул итә икән. Әгәр ҙә һәр урында ла артыҡ көсөргәнеш тояһығыҙ икән, тимәк, һеҙ беренсе төркөмгә ҡарайһығыҙ. Шуға ла бындай кешеләргә эш урынын йыш алыштырыу ярҙам итмәйәсәк, сөнки яңы эштә лә ошо уҡ тарих ҡабатланасаҡ.

■ Һиндостан диетологтары онкологик сирҙәрҙе иҫкәртеү өсөн ун ҡағиҙә тәҡдим итә. Уларҙың фекере буйынса, иң мөһиме, дөрөҫ туҡланыу: сәләмәт туҡланыу иммунитетты нығыта һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефен түбәнәйтә. Балалар ярҙырылмаған ярмалар менән йышыраҡ туҡланырға тейеш. Рационда емеш-еләк, йәшелсә һәм ярмалар күберәк булһын. Итте аҙыраҡ ашарға кәрәк. Ризыҡты быуҙа бешереү яҡшыраҡ. Аш һендереү процесын тиҙләтеүсе тәмләткестәр (имбирь, һарымһаҡ, карри, розмарин) ҡулланығыҙ. Алкоголле эсемлектәрҙән баш тартығыҙ. Был туҡланыуға ҡағылған кәңәштәр. Бынан тыш, ғалимдар ауырлыҡты контролдә тоторға, спорт менән шөғөлләнергә, стресҡа ҡаршы көрәшергә һәм даими рәүештә табиптарға күренеп торорға саҡыра.

■ А витамины - киң билдәле антиоксидант. Аҙыҡ менән был витаминды япраҡлы йәшелсәләрҙән, кишерҙән алабыҙ. Организм был витаминды бета-каротинға әүерелдерә, ул иһә сәләмәтлекте һаҡларға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бета-каротинға бай ризыҡ ашаусы тәмәкеселәр яман шеш менән һирәгерәк сирләй. Британия һаулыҡ һаҡлау комитеты белгестәре бета-каротин нигеҙендә онкологик сирҙәргә ҡаршы көрәшәсәк өҫтәмә яһап ҡараған. Тәжрибәлә тәмәке тартыусы 15 мең кеше ҡатнашҡан. Улар даими рәүештә бета-каротин дозаһы алған. Һигеҙ йылдан һуңғы тәжрибә күрһәтеүенсә, тәүҙә һөҙөмтәләр яҡшы булған. Әммә аҙаҡтан асыҡланыуынса, таблеткаларҙағы синтезланған бета-каротин организмға тәбиғи витамин кеүек тәьҫир итмәй икән. Шуға ла белгестәр таблеткаларға артыҡ ышанмаҫҡа кәңәш итә.

*ДОНЪЯ - ҠУЛАСА*

# ҠАРҒА ҠАРҒЫШЫ

–Ҡарр-ҡарр... Тауышҡа Фәүзиә ҡобараһы осоп уянды, хатта күпмеләр ваҡыт тын алырға ҡурҡып ятты. Тауыш башҡа ҡабатланмағас, торорға ынтылғайны, башын күтәрә алманы ла ҡуйҙы. Ҡурғаш тултырылғанмы ни, үҙ башына үҙенең көсө етмәй ятһын инде, әй. Бер ере лә ауыртмай, һыҙланмай, тик башын ғына күтәрә алмай. Ауырлыҡ яйлап аяҡ-ҡулына таралды, бер аҙҙан ҡыл да ҡыбырлата алмаҫлыҡ хәлгә килде.

Быны нисә йыл инде ҡарға тауышын ишетеү менән ошолай ҡаты ауырыуға һабыша ҡатын. Кисә, йоҡларға ятҡансы ғына, үҙен бик яҡшы тоя ине. Һуңға тиклем мендәрҙәре кәпрәнен алмаштырып ултырҙы. Башлаған эшен аҙаҡҡа ҡалдырырға яратмай ул. Сәңкелдәп йөрөгән ҡәйнәһе булмаһа ла, яҫтыҡ йөнөнән ҡалған саң-туҙанды һөртөп, йыйыштырып ятты. Күптән ҡулы теймәй йөрөгән эшен тамамлап ҡуйғанына ҙур кинәнес тойғоһо кисереп, иртәгә башҡараһы йомоштарын барлап, тыныс күңел менән башын мендәргә терәгәйне, таң һарыһы менән килеп еткән ҡара ҡарғаларҙың йәмһеҙ тауышы уятты.

Ошо ҡоштар йылы яҡтан ҡайтыуҙары тураһында хәбәр итеүе була, йәш бала көн менән төндө бутаған кеүек, Фәүзиәнең дә төнө - төн, көнө көн түгел. Төшөндә генә түгел, өнөндә лә һаташып бөтә ул.

Ауылдаштары үткән йыл ай-вайына ҡуймай, дауаханаға алып барып һалып ҡуйған уны. Нык ҡурҡытҡан шул үҙе лә . Яҙа-йоҙа булһа ла хәтерләй. Яҙғы ташҡында кер сайҡайым, шулай иткәндә бөтә ауырыу һыу менән китә, тип йылғаға китеп барғанында тотоп алғандар. Ерекле бәләкәй булһа ла, ҡышын яуымдың нисек булыуына ҡарамай, бейек ярынан сығып, нык таша. Ана шул ташҡындың иң нык ҡоторонған мәлендә яр буйында осратҡандар уны. Ҡыҙҙарына хәбәр итеп тә ҡайтмағас, ике яҡ күршеһе алмашлап берәр көн өйҙәрендә тотҡандан һуң, дауаханаға алып барырға мәжбүр булғандар. Файҙаһы юҡ түгел - бар инде дауаланыуҙың. Ял итеп, хатта таҙарып ҡайтты ул. Шулай ҙа ҡарғалар ояһын нығытып, һалған йоморткаларынан балалары сығып, улары осорға өйрәнеп, бер аҙ тынысланмайынса, Фәүзиә барыбер тынғылыҡ тапманы. Һаташты, торҙо, балаларының илле йыл элек мәрхүм булған атаһын саҡырҙы, илерҙе, иланы, баҡсаһындағы тирәктәге ҡарға ояларын туҙҙырырға уйлап, менәм тиеп, бер нисә тапҡыр йығылып төштө. Ҡул, бит тиреһен һыҙырып, ҡанһыратып, кеше танырлығы ҡалманы. Тәүҙәрәк йәлләп ҡараған ауылдаштары һуңынан ҡурҡа башланы, бала-саға өйөн урап үтте. Аҡылдан шашҡан, тигәндәрен ишетһә лә, Фәүзиә үҙенең нәмә эшләгәнен бик яҡшы белә. Тик ярамаған эштәрҙән үҙен туктата алмай, әйтерһең дә, кемдер уға шулай эшлә, былай эшлә, тип ҡурҡытып тора. Был ваҡытта ҡатын үҙенә буйһона алмай, бер нисә көн йоҡламай, йә, киреһенсә, ашамай-эсмәй, рәттән ике-өс көн тормай тик ята.

Быны әле лә аяҡ-ҡулын бәйләп һалғандай, түшәгендә лыпын ята. Көн яҡтырҙы, яҙғы йомарт ҡояш нуры өй эсен яҡтыртып, хатта йылытып ебәрҙе. Ҡарғалар тыуған төйәгенә ҡайтыу шатлығын кисерә. Уларҙың тауышы берсә тынып ҡала, берсә бөтә өй эсенә тула, ауыл өҫтөнә тарала. Был ваҡытта ҡатын башын ҡайҙа ҡуйырға, ҡолағына нимә тығырға белмәй.

Ғөмүмән, Фәүзиә бәләкәйҙән ошо ҡоштарҙы яратманы. Был күрә алмаусанлыҡ әсәһенән күскәндер, тип уйлай ул. Әсәһе лә бит таш булһа - таш, тап булһа - тап бәреп, уларҙы һәр ваҡыт ҡыуа торғайны. Ҡош-ҡорто уңмағанын да бер ғәйебе булмаған ошо ҡарғаларҙан күрҙе.

Эш ҡоштарҙың бер туктауыҙ ҡарҡылдауында ғына түгел, әлбиттә. Уларҙың Фәүзиәнең үҙен дә яратмауында. Бәләкәй сағында тиҫтерҙәре менән уйнап йөрөгәндә башҡа бер кемгә лә түгел, ә уның башына килеп ҡуна торғайнылар. Ҡуныу ғына түгел, суҡырға маташалар ине. Берҙән-бер ҡыҙы бер нисә тапҡыр илап ингәс, әсәһе уларҙы бөтөнләй күрә алмаҫ булды. Өй башына менеп, ҡулы еткән ерҙәге ояларҙы туҙҙырырға уйланы. Менгәнендә ҡолап төшөп, бот һөйәген һындырҙы ла шул ятыуынан башҡа торманы, гүр эйәһе булды. Унлаған ҡарға ояһы булған ҡарт тирәкле йорт, шулай итеп, мираҫ буйынса Фәүзиәгә ҡалды.

Әсә назын, һөйөүен, ҡурсалауын саманан ашыу татыһа ла, ир ҡатыны булыу бәхетен оҙаҡ кисермәне ул. Хәләле бер-бер артлы тыуған өс ҡыҙын етем ҡалдырып, үпкә сиренән үлеп киткәс, башҡа тормошҡа сыҡманы. Шуға ла ул, әсәһе кеүек, бөтә көсөн, тырышлығын балаларын үҫтереүгә арнаны. Яңғыҙы үҫтергәнгәме, Фәүзиә ҡыҙҙары башҡаларға ҡарағанда айырылыбыраҡ торорға, матурыраҡ кейенергә, тәмлерәк ашарға, яҡшыраҡ йәшәргә тейеш, тигән тынғыһыҙ уй менән йәшәне. Ошо бәйләнсек уйы уны сәмләндерҙе, ғәмләндерҙе, хатта тыныс йоҡоһонан яҙҙырҙы. Берәйһенең ҡыҙында яңы кейем күрһә, үҙенекеләргә мотлаҡ икене алып кейҙерҙе. Сәстәрен көнөнә бер нисә тапҡыр һүтеп үрҙе, үргән һайын төрлө таҫма таҡты. Тик, нисек кенә тәрбиәләмәһен, өсөһөнөң дә сәсе сыҫҡан ҡойроғонан артыҡ ҡалынайманы. Май, ҡатыҡ та һөрттө, эркет менән дә йыуҙы, төрлө үлән тамырҙары, сәскә тәнәтмәләре менән дә сайҡаны - файҙаһы булманы. Йомортка һарыһы файҙалы тигәнен ишеткәне бар ине, ошо ысулды файҙаланырға булды. Тик үҙе тауыҡ йомортҡаһын тотонорға ҡыҙғанды. Әмәлгә ҡалғандай, баш осондағы тирәктә ҡарғалар ҡарҡылдаша башланы. Ҡатын күп уйлап торманы, өй башына үрмәләне лә, дүрт-биш ояны таҙартып төштө.

Ҡарға йомортҡаһының файҙаһы булдымы - ҡыҙҙарының сәсе, ысынлап та, ҡуйы, матур булып үҫеп китте. Нимә булһа ла әсәләренең яҡлаясағына, һүҙ тейҙермәйәсәгенә ышанған ирка ҡыҙҙарҙың өсөһө лә һауалы, үҙ һүҙле, тәкәббер булып буй еткерҙе һәм бер-бер артлы ҡалаға китеп төпләнде лә Фәүзиәне онотто. Йылына бер ҡайтып әйләнһәләр, әсә үҙен сикһеҙ бәхетле тойҙо, юғиһә, өсәр йыллап ҡайтмағандары ла бар. Бигерәк тә тәбиғәт уянған, бөрөләр тулышҡан, ҡоштар оя ҡорорға ишен эҙләгән мәлдә үҙен яңғыҙ тоя ул. Врачтар уны яҙғы депрессия тип атай һәм йыл һайын уға йылдың ошо миҙгелендә дауаханаға ятырға кәңәш итә. Тик был хәләтен ҡатын үҙе генә аңлай: ҡарға ҡарғышын кисерә ул. Ерҙең бер сигенән икенсеһенә йыраҡ юл үтеп, тыуған төйәгендә оя ҡороп, бала сығарам тип ҡыуанып йөрөгән ҡошсоҡтарҙы рәнйетте бит ул. Ҡыҙҙарын күрергә зар-интизар булып, аҡылдан шашыр хәлгә килһен, тик аҡылын юймаһын, нимә эшләгәнен аңы менән тойһон, тип ҡарғағандарҙыр. Әгәр тоймаһа, ошо яза булмаҫ ине, сөнки йүләрҙәргә, тилеләргә был тормошта йәшәүе күпкә еңелерәк бит.

Фәүзиә белмәй ине әле: өләсәһе менән олатаһы бынан бик күп йылдар элек, урыны матур тиеп, биш-алты тирәкте йыйып, ошонда йорттарын күсереп ултыртҡан. Ә йөҙйәшәр ағастарҙың һәр ботағында тиерлек нығытҡан ояларында ҡарғалар бала сығарып ултырған булған...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

## Теш таҙартыу сәнғәте

Ит, йомортҡа һәм балыҡ ашамауҙы мин ике тәүлеклек ҡоро асығыу менән алмаштыра инем. Бындай процедураны айына бер тапҡыр үткәрергә тура килде. Ни өсөн "ҡоро" тип атайым? Ризыҡтан баш тартыу ваҡытында мин ауыҙыма бер ни ҙә, хатта ҡайнатылмаған һыуҙы ла алмай инем. Киске аштан һуң мин үҙемдә тәүәккәллек тәрбиәләй башлайым. Уның асылы шунан ғибәрәт: мин үҙемә ышаныслы тауыш менән "Беҙҙең менән бер ни ҙә булмаясаҡ. Ҡырҡ һигеҙ сәғәтте нисек тә булһа түҙербеҙ. Ун алты сәғәт - йоҡола, тағы ун алтыны эштә уҙасаҡ. Тағы ун биш сәғәт кенә сыҙарға ҡаласаҡ, булдырабыҙ беҙ уны!" тип әйтә инем.

Шунан дөрөҫ итеп теш таҙартырға өйрәндем. Төрлө конфигурациялы ун дүрт теш щеткаһы һатып алғайным. Уларҙың барыһын да ҙур кружкаға теҙеп ҡуйҙым. Кисен бер щетканы алам да, утыҙ ике тешемдең һәр береһен еренә еткереп таҙарта башлайым. Башҡа бер ни хаҡында ла уйламаҫҡа тырышам, щеткалағы ҡылдарҙың теш араһына инеп, миллионлаған микроб сығарғанын тойомлайым. Ауыҙ ниндәйҙер еңеллек, шатлыҡ кисерә.

Ышанырлыҡ та түгел, ләкин тешемде дөрөҫ таҙартырға мин бары тик ҡырҡ бер йәшемдә өйрәнгәнмен. Һигеҙ йылымды мәктәптә, дүрт йылымды педагогия училищеһында, алты йылымды политехника һәм педагогия юғары уҡыу йорттарында уҙғарҙым, ләкин бер тапҡыр ҙа тешне дөрөҫ таҙартыу тураһында ишеткәнем юҡ ине. Хәйер, тешне таҙартыу тураһында ғынамы ни... Рәсәй мәғариф системаһы, ғөмүмән, кешенең йәмғиәттәге киләсәген ҡуҙалламай, был өлкәлә белем бирмәй. Рәсәйҙә йәшәүселәрҙең бөтә бәләһе - шул уйланып еткерелмәгән һәм дөрөҫ эшләмәгән мәктәп системаһында. Ярай әле, тормош тигән оло яуҙа мин тере ҡалдым. Беҙҙең быуын уға ҡоралһыҙ, белемһеҙ аяҡ баҫты. Шуға ла минең бала саҡ, үҫмер саҡ, йәшлек дуҫтарым хәҙерге ваҡытта ҡәберҙәрҙә тапты урынын. Кемдер үҙ-үҙен үлтерҙе,

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ




# ҺҮҘЕ - САФ ДӨРӨҪЛӨК,

## миссияһы - асыҡ хәҡиҡәт

**Инглиз философы Томас Карлейл, (Thomas Carlyle, 1795-1881) үҙенең диндәштәре - насраниҙарға мөрәжәғәт итеп, "Ҡаһармандар" китабында Мөхәммәт бәйғәмбәр тураһында яҙа. Был китаптан өҙөктәр килтереү урынлы булыр, сөнки улар иҫкермәй торған хәҡиҡәтте бәйән итә.**

Мөхәммәттең (с.ғ.с.) берәүҙән дә дәрес алмағанын онотмаҫҡа кәрәк. Ул йәшәгән дәүерҙә гәрәптәрҙә яҙма ныҡ таралмаған. Ул саҡта гәрәптәр ныҡ наҙан була. Мөхәммәт (с.ғ.с.) ғилемде икенсе сығанаҡтан да ала алмай, ят уттың маяғы менән "ҡоралланыу" мөмкин түгел. Ул фәҡәт үҙенән алда килгән бәйғәмбәрҙәр кеүек үк, бөйөк кешеләрҙең береһе, мин уны ҡараңғылыҡ баҫҡан дәүерҙә юл асыусы нур менән генә сағыштыра алам.

Мөхәммәт (с.ғ.с.) - бөтөн ғүмере буйы үҙ принциптарына тоғро ҡалған, шуларҙы ҡыйыу һәм тәүәккәл яҡлаған кеше була. Ул шул тиклем изге күңелле, яҡшы, инабатлы һәм тәҡүәле була, шуға ла Уның күркәм сифаттарын һанап бөтөрөрлөк түгел. Ул азат, ихлас, көслө һәм ныҡышмал кеше, ысын ир-егет була. Матур холоҡло Мөхәммәт (с.ғ.с.) менән аралашыуы һәр кемгә рәхәтлек биргән. Ул кешеләрҙе ҡыуанып, киң күңел, асыҡ йөҙ менән ҡабул иткән. Улар менән һәр саҡ яҡшы мөғәмәлә иткән, ә йөҙө йөрәктән сыҡҡан нурлы йылмайыу менән балҡып торған. Ләкин бит арабыҙҙа йылмайыуы ла үҙҙәренең ҡылған ғәмәлдәре кеүек үк яһалма булған кешеләр бихисап.

Мөхәммәт (с.ғ.с.) - ғәҙел, дөрөҫлөк һағында тороусы, зирәк, алдан күрә белеүсән кеше булған, ә йөрәге ҡурҡыуҙың нимә икәнен дә белмәгән. Уның бөтә булмышы нур менән тулышҡан, гүйә, ҡараңғылыҡ эсендәге кешеләргә юл күрһәтеп барыусы шәм. Ул үҙенең тәбиғәте менән бөйөк, Ул бер ниндәй ҙә академияларҙа уҡымаған, Уны остаздар ҙа тәрбиәләмәгән, һәм Ул быларға мохтаж да булмай.

Фанатик наҙан насраниҙар һәм дәһриҙәр уның тураһында, шәхси даны өсөн тырышҡан, тигән уйҙырма таратырға тырыша. О, Аллаһ, юҡ, Мөхәммәт (с.ғ.с.)- сүллектең һәм тауҙарҙың күҙҙәре мәрхәмәт, миһырбанлыҡ, хикмәт һәм аҡыл менән балҡыған бөйөк улы - уның уй-булмышын был донъяның әүрәткестәре һис ҡасан да биләмәгән. Уның йөрәгендәге бер генә уй ҙа был донъяның хакимлығы, юғары дәрәжәһе менән бәйләнмәгән. Сикһеҙ рух тураһында һүҙ барғанда бүтәнсә булыуы ла мөмкин түгел. Ул яһалмаһы ла ялған бөйөк йәнле кешеләр иҫәбенән. Беҙ күптәрҙең үҙҙәренә исем-дәрәжәләр ҡушырға ятрҡанын беләбеҙ, был исемдәр уларҙың ысынбарлығын сағылдырмай, бындай кешеләр тормошта ла ялған юлдан барыуҙы хуп күрә. Мөхәммәт (с.ғ.с.) бөтөнләй икенсе кеше, ул ҡолаҡты иркәләгән матур, әммә уйлап сығарылған, ысынбарлыҡҡа тура килмәгән ялған нәмәләрҙе яратмаған, ҡабул итмәгән. Ул тулыһынса үҙаллы шәхес булған. Был донъяла барған процестар тураһында тәрән хәҡиҡәтте асыусы бөйөк шәхес. Йәшәйеш сере, гүйә, уның күҙ алдында йәйрәп ятҡан. Бер ниндәй легендалар, ялғандар, уйлап сығарылған нәмәләр уға ошо серҙе асыуға ҡамасау итә алмаған. Был сер уның йөрәгенән урғылып сыҡҡан. Бындай ихласлыҡ бөйөк илаһи мәғәнәнән, асылдан тыш мөмкин түгел. Бәйғәмбәр һөйләй башлаһа, уны тын ҡалып тыңлар булғандар, ул әйткәндә халыҡ йөрәге менән тулыһынса ҡабул иткән. Һындарға табынған гәрәптәр иманға килгән, улар бар күңелдән ислам диненә йәбешкән, сөнки был дин - Хәҡиҡәт. Беҙ уны дөрөҫлөк тип ҡабул итергә тейешбеҙ.

Был диндең нигеҙен ышанырға мөмкин булған берҙән-бер нәмә тәшкил итә. Диндәр төрлө рәүештә, улар төрлө кейемгә төрөнгән, әммә ислам дине генә уларҙың рухын бер бөтөнлөк менән тәшкил итә, ошо бөтөнлөктө үҙ эсенә ала. Ошо рухҡа эйәргән кеше ғаләм тигән изге ҡорамда бөйөк көтөүсегә әйләнә. Был рухҡа эйәргән кеше Аллаһтың ҡанундары һәм әмерҙәре менән камиллыҡта йәшәй, уларҙы файҙаһыҙ һүҙ көрәштереүгә, низағҡа әйләндермәй. Ислам ялған диндәр һәм уйлап сығарылған культтар тантана иткән осорҙа барлыҡҡа килә һәм уларҙы йота, юҡ итә, ул быны эшләргә тейеш була. Ислам күтәрелгәс, гәрәптәрҙәге барлыҡ мәжүсилек кипкән үлән шикелле янып юҡҡа сыға, насраниҙарҙың файҙаһыҙ һүҙ көрәштереүҙәре һәм ялған булған бар нәмәләре сәң һымаҡ таралып бөтә.

Мөхәммәттең (с.ғ.с.) һүҙе лә, эше лә бер нәмәне генә раҫлай, ул - бөтөн кешелектең миһырбанлы, изге, йомшаҡ күңелле туғаны. Ул тәүге әсәбеҙҙең, тәүге атабыҙҙың улы.

Мин уны тәбиғәте менән яһалмалыҡ, кәперәйеү кеүек сифаттарҙан азат булғаны өсөн яраттым. Унда тәкәбберлек юҡ, ләкин үҙен кәмһетеү ҙә, көсһөҙлөк тә уға хас түгел. Мөхәммәт (с.ғ.с.) берәүҙе лә бер ҡасан да алдамай, вәғәҙәләр менән уйнамай, буш һүҙ һөйләмәй. Бер генә нәмә уны борсой: Әхирәткә ирешерлек ғәмәлдәр ҡылыу һәм Ҡиәмәт көнөндәге язанан ҡурҡыу. Тормош һәм үлем мәсьәләһе Бәйғәмбәрҙең бөтөн иғтибарын, диҡҡәтен биләй, ә сикһеҙ ихласлығы һәм ныҡышмаллығы был юлдағы ауырлыҡтарҙы еңергә ярҙам итә. Мөхәммәттең (с.ғ.с.) ролен кәметеп күрһәтергә тырышҡандар бар. Мин быны иң оло еңәйәт тип һанайым. Юҡты уйлап сығарыусыларҙың йөрәге - һаҙлыҡ эсендә, күҙҙәре хәҡиҡәтте күреүҙән мәхрүм, улар бөтөн яҡлап та алдыҡ ҡамауында тороп ҡалған.

Исламдағы бер сифат мине һоҡландыра, минеңсә, ул исламдың иң гүзәл, мәшһүр сифаты - кешеләр араһындағы тигеҙлек. Был, бер һүҙһеҙ, ҡараштарҙың хаҡлығына һәм фекерҙең дөрөҫлөгөнә күрһәтә. Мосолмандар, ҡайһы ғына илдә йәшәмәһен, бер-береһе менән бәйләнештә, улар бер өммәттән һәм исламда - һәр кеше тиң хоҡуҡлы.

Исламдың яҡтылығы киңлектәрҙе солғай, уның балҡышы икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙе яҡтырта, уның нуры төньяҡ менән көньяҡты тоташтыра, көнбайыш менән көнсығышты бәйләй. Был хәл Мөхәммәттең (с.ғ.с.) рәсүллегенән һуң бары бер быуат эсендә эшләнә. Дөрөҫлөктөн күҙ сағылдырғыс балҡышы һәм Аллаһтың ҡулланмаһы - рисаләт ер йөҙөндә йәшәгән ярты кешелектең йөрәген нурландыра.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әҙерләне.**

---

үлтерелде йә былай үлде - был үлемдәр беҙгә егерме йәш тулмайынса уҡ һөкөм башлағайны.

Мин уңышлы кешемен. Атам-әсәм яҡшы гендар һәм тәрбиә тапшырған. Ләкин мин гел генә үҙ ҡанундарым буйынса йәшәргә тырыштым. Уңышһыҙлыҡтарға тап булғанда ла бөтәһен дә яңынан башларға ҡурҡманым. Кешеләр ҡатнашлығындағы ығы-зығылы донъя - ул алдатҡыс, ысын булмаған донъя, тип тойҙом.

Донъя ҡанундары менән танышыуымды нәҡ ана шул теш таҙартыу ҡағиҙәләрен үҙләштереүҙән башланым да инде. Шырпы башы ҡәҙәре генә паста һалам да, щетканы яй ғына, йомшаҡ ҡына итеп тәүҙә өҫкә табан, шунан унға һәм һулға табан йөрөтәм. Шул уҡ тәртиптә тештәрҙең эске яғын таҙартам. Бер процедура вайытында өс щетка алмаштырам. Өс тапҡыр ауыҙҙағы шыйыҡсаны төкөрәм. Тештәрҙе тыштан таҙартҡандан һуң, эстән айырым таҙартам. Шул уҡ тәртиптә хәҙер инде пастаһыҙ таҙартып сығам. Кешенең ҡартайыуы тап тештәрҙән башланыуы хаҡында уйлана башланым шунан.

Иң мөһиме - телде таҙартыуҙы ҡағиҙә итеп алыуым. Ашыҡмай ғына, телдең осонан башлап, щетканы тамаҡ яғына йүнәлтәм. Тәүге арала нервылар сыҙай алмағанлыҡтан, уҡшыта ине. Ләкин тырышлыҡ - ул ахмаҡ үҙһүҙлелек түгел, тырышлыҡ уңыш килтерә. Тәүҙә ауыҙыма саҡ һыйған телем һуңғараҡ бәләкәсәйә башланы. Бер миллиметрлыҡ аҡ юшҡын өс йылдан юҡҡа сыҡты тиерлек. Тел ситтәрендәге ҙур ҡыҙыл бизҙәр ҙә бәләкәсәйеп, үҙҙәренең элекке урынына ҡайтты. Һуңынан ғына мин теш таҙартыуҙың нәҙек эҫәктәр эшмәкәрлеген нормаллаштереү өсөн мөһим икәнен белдем.

Ҡоро асығыуҙан мин ошолай сығa инем: киске ашҡа - бер балғалаҡ ҡаймаҡ менән буталған сөгөлдөр салаты. Асығыуым ныҡ булғанда ике телем ҡара икмәк ашағаным да булды. Ул осор өсөн иң ауыры - аҙыҡты еренә еткереп сәйнәү ине. Тәүге осорҙа мин ризыҡты сәйнәмәйенсә, хас та эт һымаҡ йота инем. Аҙаҡ ҡына ошо ихтыярһыҙлығым менән көрәш башланым. Хатта әле лә, ун һигеҙ йыл ғүмер уҙғас, мин ҡайһы берҙә аҙыҡты сәйнәмәйенсә йотоп ебәрәм. Кеше аһ-зары мотлаҡ уның ауыҙы менән бәйле шул. Ҡайһы берҙә артыҡ ашауҙан зарығабыҙ, ҡайһы берҙә унан сыҡҡан уйлап әйтелмәгән һүҙҙәр хаҡында үкенәбеҙ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Әүҙемлектән алынған ҡәнәғәтлек

Әүҙем булыу - тимәк, хәл-ваҡиғаларға һине үҙ ағышына алырға мөмкинлек бирмәй, уларҙы үҙеңсә бороу ул. Һеҙҙең үткәндәрҙә булған йәки киләсәктә көтәсәк ваҡиғаларҙы үҙегеҙ теләгәнсә тәфсирләп, үҙегеҙ теләгәнсә бороп ебәреү мөмкинлегегеҙ бар. Мәҫәлән, кемдер һеҙҙе кәмһетергә теләй икән, һеҙ был ваҡиғаны үҙегеҙсә бора алаһығыҙ. Ябай, ғәҙәти кеше булһағыҙ - асыуланасаҡһығыҙ, даими рәүештә үҙ-үҙегеҙгә ошо һорауҙы бирәсәкһегеҙ һәм кире энергияны йыясаҡһығыҙ, ә инде әүҙем булһағыҙ, теләһә ниндәй ваҡиғаны ыңғай яҡҡа бороп, унан яңы энергия аласаҡһығыҙ. Элеонора Рузвельт әйткәнсә: "Үҙегеҙ риза булмаһағыҙ, берәү ҙә һеҙҙе ҡыйырһыта алмай". Ә Ганди был хаҡта шулай ти: "Улар беҙҙең үҙ-үҙебеҙгә ихтирамды, үҙебеҙ риза булмай тороп, тартып ала алмай".

Һеҙ негатив хәл-торошҡа үҙегеҙсә төрлө аңлатма бирә алаһығыҙ.

1) Бахырҡай, мин уға нисек ярҙам итә алам, моғайын, уның көнө бик ауыр булғандыр.

2) Был ваҡиғанан мин нимәгә өйрәнә алам һәм тормош камиллығына табан барған йәшлымда уны тәжрибә итеп файҙалана аламмы?

3) Был тормошта күҙәтелгән һәр нәмәнең үҙ сәбәбе бар, был хәл-тороштан да ниндәйҙер ыңғай нәмә килеп сығасаҡ.

4) Әгәр ошо икенсел инцидентҡа тыныслығымды ҡаҡшатырға юл ҡуйһам, минең менән нимә буласаҡ (физик һәм рухи йәһәттән)? Юҡ-барға артыҡ иғтибар бирәм түгелме?

5) Мин үҙемдә әфлисун кеүек итеп ҡарарға тейешмен - әгәр мине һыҡһаң, тышҡа бары тик эстә нимә бар, шул сығасаҡ. Әгәр мин үҙемдә тыныслыҡ, изгелек һәм үҙ-үҙемдә контролләүҙе үҫтергәнмен икән - ошо матур сифаттар үҙен күрһәтәсәк. Әгәр тышҡа кире сифаттар сыға икән, тимәк, минә шәхси камиллыҡ өҫтөндә эшләргә лә эшләргә әле.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: йыландың сағыуы үлемгә килтермәй, ә организмға таралған ағыу үлтерә. Икенсе кешенең йыландай сағыуынан һуң уның ағыуы таралыуына юл ҡуймағыҙ.

Әүҙем булыу - алдығыҙҙа ятҡан тормош келәмендә бары тик ыңғай ваҡиғаларҙы ғына күреп, сағыу ғүмер итеү ул. Күңелһеҙ тәжрибә булмай. Һәр тәжрибә характерығыҙҙың теге йәки был элементын яҡшыртыу мөмкинлегенә эйә йәки һеҙҙе яңы: рухи, физик, аҡыл, һөнәри бейеклеккә күтәреү өсөн сәҡырыу булып тора. Ысын еңеүселәр проблемаларҙа яңы мөмкинлектәр күрә. Башҡалар еңелгәндә лә улар алға шыуыша. Ҡара йәшен болоттары араһында һәр саҡ зәңгәр күк йөҙөн күрергә тырышығыҙ, ул унда ысынлап та бар бит.

